Авторҙар коллективы

# ИСЛАМ ЮЛДАРЫНДА

Суфыйсылыҡ һабаҡтары һәм
шәйех Зәйнулла Рәсүлев шәжәрәһе.
Ислам дине тарихы, әҫәрҙәр
һәм халыҡ ижады

Өфө – 2011

Рәсәй Ислам университеты
МҮДН РФ ҡарары буйынса баҫыла

Ислам юлдарында/Авторҙар коллективы. – Өфө: РФ МҮДН РИУ, 2011. – 106 б.

Китапта ислам дине тарихы, суфыйсылыҡ һабаҡтары сығанаҡтарына нигеҙләнгән әҫәрҙәр һәм халыҡ инсады, шәйех Зәйнулла Рәсүлевтың шәжәрәһе яҡтыртыла.

Ислам тарихы менән ҡыҙыҡһыныусылар, дини уҡыу йорттары белгестәре һәм шәкерттәр өсөн.

Р.А. Раев, Р.И. Яҡупов редакцияһында.

© РФ МҮДН РИУ, 2011

## ИҢ ӘҮҮӘЛ КӘРӘК НӘМӘ – ИМАН

Бисмилләһир-рахмәнир-рахим!

Милли уҙаңды уятыу һәм рухты тергеҙеү билдәле булыуынса өс тағанға таяна. Фән һәм мәҙәниәт милләтте үҫтереүсе ике таяныс. Ә бына быуаттар буйы халҡыбыҙҙың ҡот-бәрәкәтен һаҡлап килеүсе өсөнсө терәгебеҙ – Иман, Ислам дине.

Бөйөк фәлсәфәсе – шағир Мифтахетдин Аҡмулланың: «Иң әүүәл кәрәк нәмә – иман», тигән аҫыл һүҙҙәре асылыбыҙҙы аңлата. «Иман һәм дин хөкөмдәрен, фарыз, важиб[1] һәм харамдарҙы өйрәтегеҙ, ғәмәлдәрҙе ҡылдырырға ғәҙәтләндерегеҙ. Дини тәрбиәне йәш сағында алған бала ҙурайғас та юғалтмаҫ», – тип яҙған Ризаитдин Фәхретдин. Атаҡлы ғалим Фәтхелҡадир Сөләймәновтың Инан тигән псевдонимы

[1] Важиб – үтәлергә тейешле дини эш.

ла ғилем, төрки халыҡтары һәм Ислам диненә инаныуҙы аңлата.

«Дин – Иблескә ҡаршы яуҙың алғасҡыһы, рухыбыҙҙың ышаныслы йән һаҡсыһы», – ти замандашыбыҙ Мәүлит Ямалетдин шиғырында. Хәҙерге әҙәбиәттә дин әһелдәре тарихы яҡтыртыла, Ҡөрьән мотивтары һәм фәлсәфәһе үҫтерелә. Ғайса Хөсәйеновтың «Донъя» (1998), «Ҡөрьән. Мәүлит Ямалетдиндың шиғри тәржемәләре» (2002), Лира Яҡшыбаеваның «Мөжәүир хәҙрәт» (2008), Рәүеф Насыровтың «Шейх Зайнулла Расулев» (2008) һ.б. шул рухта яҙылған китаптар. Ғайса Хөсәйенов «Ил азаматтары» китабында: «Арҙаҡлы шәйех (Зәйнулла Рәсүлев) хәҙрәттең хәҙерге тоҡомдаштары уның изге эштәрен дауам итергә, туған халҡы мәғарифын, ғилемен үҫтерергә бурыслы», – тигән проблема ҡуйғайны.

Беҙҙең әлеге хеҙмәтебеҙ аҡһаҡалдар кәңәше менән башҡарыла, дини йөкмәткеле әҫәрҙәрҙе һәм төрлө жанрҙарҙы туплаған китап. Силәбе ҡалаһында йәшәүсе Ишан Зәйнулла Рәсүлевтең бүләһе, шағир һәм имам-хатиб Булат Батталов был хезмәтте башлап ебәреүсе.

Был китап атаҡлы шағир Мәүлит Ямалетдиндың Ҡөрьән Кәрим тәржемәләренең фатихаһы менән асыла. Булат Батталовтың суфый һабаҡтары, күренекле дин әһеле Ишан хәҙрәт Зәйнулла Рәсүлев һәм үҙе тураһындағы материалдары уның үҙәген тәшкил итә. Силәбе өлкәһенең Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмә ағзалары Ҡамса Мортазиндың, Рафаэль Мөхәмәтйәновтың, Алевтина Вәлиеваның мәҡәләләре, Урал Ҡолошовтың хикмәте, Силәбе өлкәһендә яҙып алынған халыҡ ижады өлгөләре китаптың тематик даирәһен киңәйтә, йөкмәткеһен байыта.

«Ислам юлдарында» исемле китап йәмғиәтебеҙгә файҙалы булыр тип ышанабыҙ. Китап киң ҡатлам уҡыусыларға тәғәйенләнә, шулай уҡ уҡытыу-тәрбиә эшендә лә, динебеҙҙе өйрәнгәндә лә ҡулланыуға яраҡлы. Силәбе һәм Курган өлкәләренең Мосолман Диниә назараты мөфтөйө Ринат хәҙрәт Раев рөхсәте менән мөхтәрәм уҡыусы иғтибарына ышанып тапшырабыҙ.

*Филология фәндәре кандидаты*

*Ҡамса Мортазин.*

## ҠӨРЬӘН КӘРИМ СҮРӘЛӘРЕНЕҢ ШИҒРИ ТӘРЖЕМӘЛӘРЕ[2]

### 1. Сүрәи әл-Фатиха

Аллаһ исемдәре менән был ғәмәлде башлайым,

Бөйөк рәхмәт үә шәфҡәткә өмөтөмдө бағалайым.

1. Барса маҡтау бер Аллаһыға – Ул ғәләмдәр хужаһы;

2. Сикһеҙ рәхмәт һәм мәрхәмәт бүтән кемгә хас тағы?

3. Ул сикһеҙ ҡиәмәт көнөнөң дә берҙән-бер падишаһы.

4. Әй, Аллаһ, тик Һинең алда беҙ ғибәҙәт ҡылабыҙ,

Һинең генә ярҙамыңа ялбарышып ҡалабыҙ:

[2] Ҡөрьән. Мәүлит Ямалетдиндың шиғри тәржемәләре. Өфө: «Башҡортостан энциклопедияһы» ғилми нәшриәте, 2002.

5. Күрһәт беҙгә тура юлды, хаҡлыҡ юлына күндер,

6. Үҙең яратҡан әҙәм рәтенә индер,

Нәфрәтеңде алғандарҙы хата юлынан дүндер.

Амин.

## 112. Сүрәи әл-Ихлас

## Пакланыу сүрәһе

Аллаһ исемдәре менән был ғәмәлде башлайым,

Бөйөк рәхмәт үә шәфҡәткә өмөтөмдө бағалайым.

1. Әйт, Мөхәммәт:

«Аллаһуның бар донъяла ише юҡ,

2. Ул мәңгелек камил бер зат – йәше юҡ;

3. Уның тыумыш, тыуҙырылмыш көнө юҡ,

4. Йәнә уның һис бер ерҙә тиңе юҡ».

## 113. Сүрәи Фәләҡ

## Таң сүрәһе

Аллаһ исемдәре менән был ғәмәлде башлайым,

Бөйөк рәхмәт үә шәфҡәткә өмөтөмдө бағалайым.

1. Әйт, Мөхәммәт: «Тыуыр таңдың Раббыһына һыйынам,
2. Аллаһ бар ҡылған мәхлүктең һәр бер яуызлығынан,
3. Йәнә шом һәм зарар тулы төн ҡараңғылығынан,
4. Төйөндәрҙе ырымлаусы сихырсы зарарынан,
5. Ҡара эсле дошмандарҙың яуызлыҡ ҡылыуынан».

## 114. Сүрәи Нас

## Кешеләр сүрәһе

Аллаһ исемдәре менән был ғәмәлде башлайым,

Бөйөк рәхмәт үә шәфҡәткә өмөтөмдө бағалайым.

1. Әйт, Мөхәммәт: «Һыйынамын әҙәмдәр Хужаһына,
2. Әҙәмдәрҙең Шаһына,
3. Әҙәмдәрҙең Аллаһына.
4. Гонаһҡа өндәп йөрөүсе ханнастың зарарынан.
5. Ул ханнас кеше йәненә яуызлыҡты һалалыр.
6. Ул ханнастар ендәрҙән дә, кешеләрҙән дә булалыр».

*Булат Батталов*

## ИСЛАМ ДИНЕ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

X–XI быуаттарҙа башҡорттар бер илаһи (бер Аллаһ) динде ҡабул итергә әҙер була. Ислам дине Ғәрәбстан бәдәүиләренең тәғлимәте булараҡ башҡорт халҡы өсөн ят булмай. Ислам дине шыма, ҡаршылыҡтарһыҙ үҙләштерелә барһа ла, Алтын Урҙа дәүерендә Ислам ҡанундарынан боронғо ғөрөф-ғәҙәткә, табыныуҙарға кире сигенеү булған. Әле хәҙер ҙә Хоҙай образы Аллаһу Тәғәлә исеме менән ҡулланыла. Ислам менән бергә башҡорттарҙың тормош-көнкүрешендә шәриғәт урын ала. Шәриғәт ғәрәп һүҙе һәм Аллаһ тарафынан күрһәтелгән тура, дөрөҫ юл тип тәржемә ителә. Уға эйәргән кеше йәннәткә керә. Халыҡта шәриғәт йәшәү рәүешенсә әхлаҡты, социаль юридик, көндәлек тормош нормаларын һәм дин-ғибәҙәт нормаларҙы үҙ эсенә ала.

Башҡорттарҙа бороңғо ырыу тәртиптәре бик көслө һаҡланған булған. Шуның нигеҙендә үҙенсә бер берләшмә барлыҡҡа килгән. Йола буйынса минорат, йәғни, мөлкәтте кинйә улға васыят итеү һаман да һаҡланып килә.

«Ислам дине рөхсәт итмәһә лә, әле лә йылҡы ите төп ризыҡ булып ҡала. Башҡорттар араһында ғәҙәттәге «магометан» фанатизмы юҡ. Улар Ҡөрьәнде бик ихлас ҡабул итмәйҙәр һәм йыш ҡына уның догматтарынан һәм ҡушҡандарынан сигенәләр», – тип яҙған XIX быуатта Ф.Д. Нефёдов. Быға тиклем хөкөм иткән ышаныуҙарҙың ныҡ булыуына ҡарамаҫтан, Ислам дине Башҡортостанда бик тиҙ таралған. Башҡорттар Рәсәйҙә үҙҙәрен христианлаштырыуға ҡаршы әүҙем көрәшкәндәр һәм йыш ҡына был сығыштарҙың башында муллалар торған.

Рәсәй хөкүмәте дөрөҫ юлды һайлаған, сөнки Ислам Рәсәйҙә йәшәгән күп халыҡтарҙың дине. 1789 йылда Өфөлә Диниә назараты (ДУМЕС – Духовное управление мусульман Европы, России и Сибири) ойошторола. Башҡортостандың баш ҡалаһы мосолман регионының үҙәгенә әйләнә. Бөтә тарафтарҙа мәсеттәр табыныу урыны булараҡ, бер ыңғайҙан белем, мәғрифәт үҙәктәре булып китә. Уларҙың һәр береһендә мәктәп була һәм унда башланғыс белем бирелә. Ә мәҙрәсәләрҙә уҡытыу күпкә киңәйә һәм юғары белем биреү кимәленә күтәрелә.

Башҡортостанда XVIII быуатҡа тиклем күсмә тормош һаҡлана. Шуға тиклем мәсет махсус ғибәҙәт ҡыла торған культ үҙәге булмай. Был вазифаны ябай ғына тирмәләр башҡарған. Ултыраҡ тормошҡа күскәс тә башҡорттарҙың мәсете үҙенең тәүге ябай эске һәм тышҡы архитектураһын һаҡлаған.

Мәҙрәсәләрҙең уҡытыу программаһын, асылда, грамматика, туған телгә тәржемәһе һәм аңлатмалары менән догматик-ҡағиҙәләрҙе өйрәнеү тәшкил иткән. Дин тәғлимәте фәлсәфәһе, дини бәхәстәр тәғлимәте, метафизика, логика, психология, дин тарихы (изге тарих), Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең тәржемәүи хәле, милләт тарихы, ғәрәп һәм фарсы телдәре, уларҙың әҙәбиәте, шулай уҡ төрөк теле, урыҫ теле, педагогика, методика, иҡтисад, хоҡуҡ өйрәнеү, тәбиғи тарих (ботаника, зоология, биология, антропология, дөйөм география, космология, астрономия, арифметика, алгебра, геометрия, химия, физика, ауыл хужалығы, рәсем һәм гимнастика, черчение) өйрәнелгән. Шулай уҡ боронғо философия (античность), интеллектуаль нигеҙҙәр: Платон һәм Аристотелдең идеялары, Ғәрәп философияһының үҫеш тарихы менән Әль-Ғазали, Ибн Син һәм Әль-Рушды, Рудаки,

Фирҙәүси, Ғүмәр Хәйәм, Саади, Хафиз, Низами әҫәрҙәре буйынса тәрән белем үҙләштерелгән.

XX быуатта башҡорт халҡының грамотаһы башҡа мосолман халыҡтарҙыҡына ҡарағанда юғарыраҡ булған. Әммә был уҡыу йорттарында дөйөм алғанда дини догматика арҡаһында белем биреү ныҡ артта ҡалғайны. Шуның өсөн дә мәҙрәсәләрҙә йәҙитсел реформалар башлана.

XVIII–XIX быуаттарҙа Башҡортостанға антропоцентрик-мистик тәғлимәт инә башлай. VIII–IX быуаттарҙа был ғәрәп хәлифтәрендә барлыҡҡа килгәйне. Уның иң юғары маҡсаты – кешенең йәне Илаһ менән ҡушылырға тейеш була, бер ыңғай фәҡирлек һәм суфыйлыҡ та хуплана.

Баҫалҡылыҡ, ябайлыҡ кешенең, халыҡтың төп йәшәйеш формаһы булырға тейеш һәм хеҙмәттә лә, муллыҡта ла шул баҫалҡылыҡ өҫтөнлөк алырға тейеш була. «Бурысы булмаған фәҡирлек – ул инде үҙе байлыҡ», ти башҡорт

мәҡәле. Күҙгә күренеп табылған ҡиммәтле әйберҙәр башҡорттарҙы ҡыҙыҡһындырмай. Башҡорт үҙенең мул тормошон бер ваҡытта ла асыҡ күрһәтмәне, әйберҙең бармы-юҡмы икәне уға ҡиммәт түгел ине. Уға ирекле булыу ҡиммәт һәм уны һаҡларға ынтылды. Туҡ тормош уның төп маҡсаты булманы. Шуның менән бергә башҡорт матди байлыҡҡа бик иҫе китмәй ине. Башҡорттоң донъяға ҡарашына суфыйсылыҡ фәлсәфәһе ҙур йоғонто яһаған: аскетлыҡ, түҙемлек һәм яҙмышҡа буйһоноуҙан килеп сыҡҡандыр. «Булғаны менән риза бул, булмаһа түҙ!» – ти башҡорт халыҡ мәҡәле.

Суфыйсылыҡ йыш ҡына шаманлыҡ (им-том) менән бик яҡынайып китә ине. Тәүге суфыйсылыҡта пантеизм, йәғни, тәбиғәтте Аллаһ менән тиң итеп күреү хас, ә фекерләүе мифтарға яҡын. Уларҙың тамғалары менән дә аңлатыла. Шуның арҡаһында башҡорттар суфыйсылыҡ тәғлимәтен

тиҙ үҙләштергән. Суфыйсылыҡта төп идея – шаманлыҡҡа хас анимистик ҡараш, йәғни, тойғолар аша ғәҙәттән тыш юғары донъя менән аралашыу.

Суфыйсылыҡ ҡарашы халыҡтың рухи һәм иҡтисади төшөнкөлөк ваҡытында бик тиҙ үтеп инеүсән. Ике быуат ихтилалдарҙан һуң башҡорт халҡында суфыйсылыҡ айырыуса киң таралған. Үҙенең идеалы һәм асыҡлығы менән суфыйсылыҡ бөтә Башҡортостанда башҡа дин тәғлимәттәрен ҡыҫырыҡлап сығарған, тип билдәләй Д.М. Азаматов. 1870–1871 йылдарҙа, ни бары бер йыл эсендә генә, шәйех Зәйнулла Рәсүлевта 7 мең кеше мөрит булып киткән.

Был мистик тәғлимәттә кешенең шәхси кисереүҙәре бик нескә булыуына бәйле, тышҡы сәбәптәргә түгел, ә башлыса эске сәбәптәргә иғтибар йүнәлтелә.

Көнсығыштың бөйөк фекер эйәләре Аль-Фараби, Ибн Сина, Йософ Баласағуни шағирҙар булған. Улар үҙҙәренең ҡыҫҡа, әммә бик тәрән мәғәнәле шиғырҙарында ҡабатланмаҫ тәжрибә индерәләр. Башҡорт суфыйсылығына Тажетдин Ялсығол, Әбелмәних Ҡарғалы, Һибәтулла Сәлихов, Шәмсетдин Зәки, Ғәли Соҡорой кеүек шағирҙарҙың йоғонтоһо бик көслө булған. XIX быуат аҙағы һәм XX быуат баштарында Троицк ҡалаһы мосолмандарҙың уҡыу-уҡытыу үҙәге булып киткән. 1884 йылда Зәйнулла Ишан Рәсүлев унда яңыса уҡытыуға нигеҙләнгән йәҙитсел мәҙрәсә асҡан.

Дини фанатизм бында ҡабул ителмәй, ә ғәҙеллек, сабырлыҡ, кешелеклек тәрбиәләнә. Мәжит Ғафури, Ямалетдин Юмаев, Абдулҡадир Инан кеүек күренекле шәхестәр бында уҡығандар. Ғабдрахман хәҙрәт Рәсүлев ошонда белем офоҡтарын киңәйтеп Бөтә Союз Диниә

назаратында хәтәр замандарҙа мосолман донъяһына тайпылышһыҙ хеҙмәт иткән.

Башҡорт суфыйсылығында иман һәм дин, граждандлыҡ рухы менән һуғарылған. Ислам дине һәм суфыйлыҡ башҡорт милли интеллегенцияһы формалашыуҙа, халыҡтың менталитеты үҫеүендә ҙур роль уйнаған. Бында айырыуса «башҡорт халҡының рухи короле» шәйех Зәйнулла Ишан Рәсүлевтың эшмәкәрлеге ҙур әһәмиәткә эйә.

## СУФЫЙСЫЛЫҠ ОРДЕНЫ НӘҠШБӘНДИӘ ҺӘМ ЗӘЙНУЛЛА РӘСҮЛЕВ

Суфыйсылыҡтың ойошторолоу осоро VIII һәм IX быуат башына тура килә, тиҙәр. Унын ойоштороу формаһы – тәриҡәт (братство, туғанлыҡ). Иң билгеле ордендар Бикташиә, Ҡадириә һәм Нәҡшбәндиә исеме менән аталған. Ул яһалма динлелек, яһалма ғибәҙәтте ҡабул итмәй. Нәҡшбәндиә ҡушаматы уға шул

һөнәрлектән алынған (чеканщик – һуғып бизәк төшөрөүсе). Ө туғанлыҡ башында рухи етәкселәр – уҡытыусылар торған. Улар үҙҙәренең уҡыусылары алдында бик ҙур абруй ҡаҙанған булғандар. Уҡыусыларҙы мөриттәр тип йөрөткәндәр. Был орден үҙенең ярандарын йәмғиәт тормошонда ҡатнашыуын тыймаған. Һәм уларҙы яңғыҙлыҡҡа өндәмәгән. Нәҡшбәндиә туғанлығы һөнәрселәрҙән һәм ваҡ сауҙә-гәрҙәрҙән торған, аҡрынлап күсмә халыҡта ла тарала башлаған. Нәҡшбәндиә орденының ағзаһы 10 «тороуҙан» торған юлды үтәргә тейеш һәм шул юлды үткәндә улар үҙен тота белеүе тураһында 11 принципты һаҡларға тейеш. Уларҙың иң мөһиме – «тыныс зикер», йәғни Аллаһтың исемен эсенән ҡабатлау, һәм өйрәтеүҙең икенсе өлөшө – үҙеңдең тәрбиәсең менән күҙгә-күҙ әңгәмә алып барыу.

Ниһайәт, уҡытыусы һәм уҡыусының тығыҙ бәйләнеше тәбәжҡупта асыла – ул ваҡыт һәр ике яҡ үҙҙәре тураһында уйҙарын бер-береһенең образында ҡуйырта. Ошо күнекмәләр уҡыусының рухи таҙалығын арттыра.

XIX быуаттан алып Нәҡшбәндиә ордены иң таралған туғанлыҡ булып китә һәм Ислам диненең ныҒыныуын раҫлай. Урта Азияла ҡаҙаҡтар араһында, Индияла бик таралған.

Суфыйсылыҡ (Нәҡшбәндиә ордены) Башҡортостанға XV–XVI быуаттарҙа үтеп инә һәм шәйех Зәйнулла Рәсүлев шуларҙың иң күренекле суфыйы булып таныла.

Зәйнулла Рәсүлев ҡорбан байрамы көнөндә Башҡортостандың Учалы районы Шәрип ауылында 1833 йылдың 9 апрелендә донъяға килә. Тәүге дини белемде Муйнаҡ ауылындағы Мөхәммәд Булғари мулланан ала. Унан һуң ике йыл Яҡуб Әхмәт әл-Ахундила үҙләштерә. Ахун

ауылы мәктәбендә уҡыған сағында ул суфыйсылыҡ нигеҙҙәре менән ныҡлап таныша һәм уға эйәрә башлай.

Ахун ауылын нигеҙләүсе мишәр мырҙаһы Ғабдулла Даушев 1770 йылдарҙа был төбәккә килеп төпләнгән булған. Ул – ауыл старшинаһы Мөслим Даушевтың улы. Ә Мөслим үҙе Батыршаның (Ғабдулла Алиев) иң яҡын дуҫы булған. Бына шул ваҡытта Ауылда суфыйсылыҡ тәғлимәте тарала башлай. Ғабдулла Даушевты ахун итеп тәғәйенләгәс, ауылдың исеме лә Ахун булып киткән.

Зәйнулла Рәсүлев ете йыл уҡығандан һуң Аҡкужа ауылына имам итеп тәғәйенләнә. 1859 йылда ул Силәбе ҡалаһы тирәһендәге Сарҙаҡлы ауылында Нәҡшбәндиә орденына инә. Ул суфыйсылыҡҡа беренсе таныштырыуҙы Ғәбделхәким Ҡорбанғәли Сарҙаҡлы ҡулынан алған.

## СУФЫЙСЫЛЫҠ ҺАБАҠТАРЫ

Суфыйсылыҡ – грек һүҙе (sofia – софия). Sofia – хикмәт тигән мәғәнәне аңлата. Суфыйсылыҡ, асылда, Ислам диненең үҙәге була. Суфыйсылыҡ тәғлимәте кеше йәненең һиҙемләүенә, уның эске күңел донъяһына ҙур иғтибар бирә. Суфыйсылыҡ – ул кеше аңының иң юғары дәрәжәгә күтәрелә барыуын күҙәтә һәм тикшерә. Был күтәрелеүҙә дүрт баҫҡыс булыуын Зәйнулла Рәсүлев «Илаһи хәҡиҡәттәр» тигән китабында ошоларҙы белдергәйне: шәриғәт, тәриҡәт, мәғрифәт һәм хәҡиҡәт.

## СУФЫЙСЫЛЫҠ ХАҠЫНДА МӘШҺҮР ҒАЛИМДАРҘЫҢ ӘЙТКӘНДӘРЕ

***Имам Малик:***

Кем ғалим булып та суфый булмаһа, ул кеше фасиҡ булыр (иманһыҙ, боҙоҡ); Кем суфый булып та ғалим булмаһа, ул кеше зиндыҡ (динһеҙ,

еретик) булыр. Ә кем инде ғалим да һәм суфый ҙа булһа, ул ысынлап Хаҡлыҡҡа ирешер.

***Имам Шәфиғи:***

Мин суфыйҙар менән дуҫлашып уларҙан шундай файҙалы әйтемдәр оттом: «Ваҡыт – ҡылыс, әгәр һин уны киҫмәһәң, ул һине киҫер»; «Әгәр һин йәнеңде (нәфсеңде) Аллаһ менән шөғөлләндермәһәң, ул һине шәһиәттәр менән шөғөлләндерер (йәғни, енси дәрт, теләк менән)». «Был донъяла миңә өс нәмә оҡшаны: ябайлыҡ, әйләнә-тирәләгеләргә баҫалҡы мөғәмәлә һәм тәссауф (суфыйсылыҡ) юлында булғандарға эйәреү».

***Имам Әхмәт-Хәнбәл:***

Суфыйҙар менән танышҡансы улына әйтә торған булған: «Әй улым, һин хәҙистәр өйрәнеүгә ашҡын һәм үҙҙәрен беҙ суфыйҙар тип атаусыларҙан төңөл. Уларҙың ҡайһы берҙәре үҙҙәренең диндәрен белеп еткермәҫкә мөмкин».

Әбу Хәмзә Әл-Бағдади атлы суфый менән дуҫлашып, суфыйсылыҡ тормошон аңлағас, улына әйткән: «Әй, улым, һин ул кешеләр менән яҡын булырға тырыш. Улар ғилемлек яғынан да, үҙ-үҙҙәрен ҡарап тороу яғынан да, Аллаһтан ҡурҡыуҙа ла, тоғролоҡ һәм тәүәккәллектең бөйөк дәрәжәһе буйынса ла, беҙҙән уҙҙылар».

***Имам Әл-Мөхәсиби:***

Үҙенең хаҡлыҡҡа ирешеүҙәге ынтылыштарын һәм суфыйсылыҡҡа нисек килеүен һөйләгәндә, түбәндәгеләрҙе әйткән: «Өммәт 70–тән артыҡ төркөмгә бүленә. Улар араһында береһе генә ҡотолоусы, ҡалғандары тураһында Аллаһ белеүселер. Күпмелер ваҡыт ғилем һәм ғәмәл тура юлды эҙләгәндә ғалимдарҙың нәсихәттәренә таянып, мин был айырымланыуҙы күҙәттем. Ошо ваҡытта Аллаһтың күп кенә һүҙҙәрен аңланым һәм Өммәттең тормошона төшөндөм. Уның араһындағы фекер айырым-

лыҡтарын күптәрҙе батырыусы, бик әҙҙәрҙе генә ҡотҡарыусы тәрән океанға тиңләнем. Шуға ҡарамаҫтан был төркөмдәрҙең һәр береһе ҡотолоуҙы үҙенә тиҙәр. Бында кешеләр бер нисә категорияға бүленә. Улар араһында мәңгелек тормошто (ахирәтте) тапҡандар бар, әммә улар бик һирәк осрайҙар.

Бында шулай уҡ кәферҙәр керә. Уларҙан йыраҡ булыу – еңеү. Кәферҙәр араһында ғалимдарға оҡшарға тырышыусылар бар, әммә улар донъяға бик ныҡ бирелгәндәр. Улар араһында дини ғилемлеләр ҙә бар, әммә ғилемдәре менән мәртәбәгә, дан-шөһрәткә, динде файҙаланып донъянан ни ҙә булһа алырға тырышалар. Кәферҙәр араһында дини ғилемле булып та, уның ҡәҙерен белмәүселәр ҙә осрай. Үҙҙәрен бик диндәр тип йөрөгәндәр ҙә бар, әммә уларҙың белемдәре кешеләрҙең йөрәктәренә үтеп керә алмай һәм нәтижә бирмәй. Улар

араһында үҙҙәрен аҡыллыларға һанап йөрөүселәр ҙә бар, әммә үҙҙәре Аллаһҡа ышаныуҙан, унан ҡурҡыуҙан мәхрүмдәр. Бында ошондайҙар ҙа керә: улар үҙҙәренең шәһүәттәре һәм донъя малы, хакимлыҡ менән берләшкән кешеләр. Был кешеләр – мәңгелек тормоштан ваз кискән, оятһыҙ рәүештә донъя артынан ҡыуыусы, донъя рәхәтен эҙләүсе шайтандар. Донъяла тере булһалар ҙа, ысынында, улар – тере мәйеттәр. Уларҙың ғәҙәте – харам.

***Имам Әл-Ғазали:***

Мин суфыйҙарҙың Аллаһ юлында барыусылар икәнлеген белдем, уларҙың тормош рәүеше иң яҡшыһы, уларҙың юлы иң тоғро (тура), уларҙың әхлағы иң таҙаһы.

***Фәхретдин Әр-Рази:***

Был бөйөк имам суфыйҙар тураһында былай яҙған: «Ислам өммәтенең мәҙһәптәрен аңлатып та, шул уҡ ваҡытта суфыйҙар хаҡында телгә

алмаусыларҙың күбеһе ҙур хата эшләнеләр, сөнки Бөйөк Аллаһты таныуға Юл – күңелдәрҙе паклауҙан, шәһүәттән ҡотолоу арҡылы ғына, был – иң яҡшы юл». Шулай уҡ: «Суфыйҙар – улар фекер эйәләре һәм тән теләктәренән йыраҡ булыусылар, улар һәр ваҡытта һәр ғәмәлдә лә Аллаһты онотмай, Уны иҫкә алыусылар. Бөйөк Аллаһҡа ҡарата әҙәп ҡағиҙәләрен үтәүҙә үҙҙәрен күнектерҙеләр һәм улар Әҙәмдең иң яҡшы улдары».

***Ғизе ибн Ғабдес-Сәләм:***

«Суфыйҙар үҙҙәрен донъяла ла, әхирәттә лә юҡҡа сыҡмай торған шәриғәт ҡанундарына нигеҙләнеләр, ә башҡалар иһә йолаларға нигеҙләнеләр; уларҙың күп кенә кирәмәттәре һәм мөғжизәләре быны күрһәтеп тора».

***Имам Әл-Нәвауи:***

«Суфыйсылыҡтың биш нигеҙе бар: йәшерен һәм асыҡ булған диндарлыҡ, һүҙҙәр һәм

ғәмәлдәр менән Сөннәткә эйәреү; осрашҡанда һәм айырылғанда кешеләргә эйәләшмәү; юҡлыҡта ла, барлыҡта ла Аллаһ биргәндәренә шөкөр итеү, риза булыу, шатлыҡта ла, ҡайғыла ла Аллаһҡа мөрәжәғәт итеү».

***Йәләлитдин Әс-Сүюти:***

Йәләлитдин Әс-Сүюти әйтеүенсә: «Дөрөҫлөктә суфыйсылыҡ үҙенә күрә хөрмәткә лайыҡ фәндер, уның маҡсаты Сөннәткә эйәреү һәм бидхәттәрҙе кире ҡағыу, нәфсе һәм уның теләктәренән йыраҡ булыу; Аллаһҡа буйһоноу һәм уның ҡарарҙарына риза булыу. Уның мөхәббәтенә ҡаҙаныу һәм башҡа нәрһәләргә илтифат итмәү. Уларҙың араһында күптәр үҙҙәрен суфыйҙар тип йөрөтәләр, ләкин ысынында улар араһында ялғандар ҙа бар. Улар суфыйлыҡта булмаған нәрһәләрҙе алып килде. Беҙҙең ғалимдар ошо ике категориялы кешеләргә ҡайһы хаҡ, ҡайһы батил икәнен айырып күрһәтер

өсөн күп көс түкте. Мин бер генә суфыйҙың шәриғәт ҡанундарына ҡаршы әйткәнен ишетмәнем. Быны тик үҙҙәрен суфыйҙар тип атаусы, ләкин уларҙан булмаусы фетнәселәр һәм фанаттарҙан ғына ишеттем».

***Мөхәммәт Ғәбдуһ:***

Суфыйсылыҡ Ислам диненең тәүге көндәренән барлыҡҡа килгән, уның ойошоуында ҙур роль уйнаған. Ул ваҡытта суфыйсылыҡтың төп маҡсаты әхлаҡҡа өйрәтеү, йәндәрҙе паклау; Ислам принциптарын һәм уның хәҡиҡәтен тормошҡа ашырыу һәм әкренләп ҡанундарҙың серенә, хикмәтенә төшөндөрөү булған. Ул замандың ғалимдары шәриғәтте бик яҡшы белгән хәлдә, уларҙы диндең серҙәрен белеүҙәрен кире ҡаҡты һәм суфыйҙарҙы динһеҙ аҙашыуҙа ғәйепләне. Сөнки дәүләт шул ғалимдар яҡлы ине, ләкин суфыйҙар үҙ тәғлимәтен йәшерергә мәжбүр булдылар, үҙҙәрен башҡаларҙан айырып

тороусы терминдарҙы, билгеләрҙе алдылар һәм үҙҙәренең яндарына һынауһыҙ, шарттарһыҙ алыуҙы тыйҙылар. Кем улар сафына баҫырға теләй, башта ул кешегә шәкерт булырға, һуңынан мөрит, унан һуң салиҡ, унан һуң ул барып етә ала, йәки юҡ... Шулай итеп, улар үҙҙәренең шәкерттәрен күп ваҡыттар буйына уның тәүәккәллеге ни ҡәҙәр ныҡ булыуын белер өсөн, тәрбиәһен күҙәтәләр, һынайҙар. Ә инде уның ихласлығын белгәндән һуң, улар уны юлдан аҙымлап-аҙымлап алып баралар.

## КҮРЕНЕКЛЕ ДИН ӘҺЕЛЕ, СУФЫЙ, ШӘЙЕХ ЗӘЙНУЛЛА РӘСҮЛЕВ ҮТКӘН ЗАМАН ҺӘМ ХӘҘЕРГЕ ЗАМАН ДИАЛОГЫНДА

Хәҙерге гуманитар фәндәрҙең хәл иткес мәсьәләһе – бөйөк дин әһеле, суфый шәйехы Зәйнулла Рәсүлевтың Ислам донъяһында һәм башҡорт халҡының йәмғиәт тормошонда тотҡан

урынын баһалау. Ул заманында йәмғиәттә танылмай вафат булды тип әйтеү дөрөҫ түгел. Мәҫәлән, академик Бартольд үҙ ваҡытында: «Зәйнулла Рәсүлев – ул башҡорт халҡының рухи короле», тип баһалаған.

Уның йоғонтоһо менән XIX быуат аҙағында йәҙитселек көсәйә, шәйех Зәйнулла Ишан Рәсүлев һәм башҡа алдынғы дин әһелдәре мосолмандарҙың артта ҡалыуын ғилемгә иғтибар булмауында күргәндәр. Ул оло аҡыл эйәһе, педагог һәм мәғрифәтсе булараҡ, уҡытыу өлкәһендә ҙур үҙгәрештәр яһай. Быға тиклем Зәйнулла Ишан Рәсүлевтың башҡорт халҡы тарихына йоғонтоһо етерлек өйрәнелмәгәйне, йәки ул Әүлиә генә булған, ә ғалим булмаған тип яңылыш аңлатылды, хатта кәмһетелә килде.

XVII–XIX быуаттарҙа батша хөкүмәте башҡорт халҡын аяуһыҙ талап юғалыу сигенә ҡуйған. Халҡын яҡлағаны өсөн батырҙар,

сәсәндәр һәм дин әһелдәре бик ҡаты эҙәрләүҙәргә дусар булғандар. Һөҙөмтәлә башҡорттар бер ниндәй хоҡуҡһыҙ һәм яҡлаусыһыҙ ҡалған. Ошо шарттарҙа Зәйнулла Рәсүлев һәм уның яҡлы суфыйҙар халыҡтың яҡлаусыһы булған. Суфыйсылыҡ халыҡтың үҙаңын үҫтереүҙә ҡеүәтле факторға әйләнгән, башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте шул нигеҙҙә барлыҡҡа килгән.

XIX быуаттан алып Рәсәйҙә техника һәм фән тармаҡтары ныҡ үҫешә. Ошо шарттарҙа мосолман йәмғиәтенә бер секта булып ҡалырғамы, әллә рухи һәм социаль өлкәләрҙә реформалар үткәрергәме, тигән һорау килеп баҫҡан була.

Зәйнулла Ишан Рәсүлев мосолман интеллигенцияһы, руханиҙар һәм ябай халыҡ араһында бик ҙур абруй ҡаҙана. Уның иң ҙур ҡаҙаныштары – XIV быуат аҙағында һәм

XX быуат башында ватандаштары һәм тотош мосолман донъяһы өсөн ҙур йоғонто яһауында. Әммә уның тарихи роле үҙ заманында баһаланмаған, батша хөкүмәтенең аяуһыҙ колониаль сәйәсәте башҡорт халҡын тулыһынса юҡ итеүгә еткергән шарттарҙа көрәше танылмаған.

Батша хөкүмәте, халыҡты артынан эйәрткән өсөн, уны алыҫ Вологда губернияһына һөргөнгә ебәргән. Әммә Аллаһу Тәғәлә тарафынан бирелгән илаһи ҡөҙрәт, шәфҡәт һәм мәрхәмәт уның күңелендә һүнмәгән. Байтаҡ йылдар үткәс, ул һөргөн юлдарынан иҫән ҡайтып, Троицк ҡалаһында атаҡлы «Рәсүлиә» мәҙрәсәһен асҡан һәм 20 йылдан ашыу директор вазифаһын башҡарған. Был мәҙрәсә үҙ заманында башҡорттар менән ҡаҙаҡтарҙың ғилми һәм дини үҙәгенә әүерелгән.

## ЗӘЙНУЛЛА ИШАН ХӨҘРӘТТЕҢ ШӘЖӘРӘҺЕ

Унының ата-бабалары бик борондан билгеле. Уларҙың 18 быуындан тараған шәжәрәһе беҙгә килеп еткән. Хәҙерге ваҡытта уларҙың киң таралған нәҫеле Башҡортостанда, Силәбе һәм Курган өлкәләрендә, шулай уҡ Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә йәшәйҙәр.

**Ишан-хәҙрәттең ата-бабалары**

Туҡһаба бей

Ҡаңлы (Алтайҙа)

Миңтәй (Сыңғыҙхан осоро)

Шахмай (Шәйехмамай)

Һеркә

Манғут

Ятабей

Яңыш

Ураҙғәли

Мораҡкол

Тупый

Солтанай

Ғашиҡ

Байрамғол

Муса

Рәсүл (имам)

Хәбибулла (хәлфә)

Зәйнулла Рәсүлев

**Ишан-хәҙрәттең нәҫеле**

| Ҡатын-дары | Мәфтүхә (1) | Хәдисә (2) | Мәхүпъ-ямал (3) |
|---|---|---|---|
| Улдары | – | – | – |
| Ҡыҙҙары | Сәлихә, Нәфисә | Рәбиға | Кәримә |
| Ейәндәре | Ғәсим<br>Фәтих<br>Нәсил<br>Әкрәм | Әхмәт<br>Мөхәммәт | Ғәләүитдин<br>Шәмситдин |
| Ейәнсәр-ҙәре | Сәкинә<br>Нәфисә | Нурлығаян<br>Сәғиҙә | – |

| | | | |
|---|---|---|---|
| Бүләләре | Әсғәт<br>Әнүәр<br>Камил<br>Булат | Зыя<br>Зәки<br>Ғәбдулла | Мөнир |
| Бүләсәр-<br>ҙәре | Рауза<br>Мәрйәм<br>Рәзиә<br>Нәжиә<br>Фәрзәнә | Әминә<br>Хәлимә | Сара<br>Сәүҙә<br>Нәжиә |

| Ҡатыны | Мәхүбә (4) | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| Улдары | Ғәбд-<br>рахман | Һибәтул<br>ла | Ғәбдел-<br>ҡадир | Ғәбдел<br>сабур | Ғәбдул<br>ла |
| Ҡатын-<br>дары | Биби-<br>әсмә(1)<br>Вәсилә<br>(2) | – | Зәйтүнә | Фатима | Бәҙәр |
| Улы | Ғабд-<br>рәүеф | – | Атилла<br>Рәсих | – | – |
| Ҡыҙ-<br>ҙары | Мәрйәм<br>Нәжиә | – | – | – | Нурия |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | Нәилә Рәшиҙә Сафуат | | | | |
| Ейән-дәре | Шәүкәт Фәрит Рушан | – | Илдар Алмаз | – | – |
| Ейән-сәрҙәр | Таң-һылыу Роза-лия | – | Фәриҙә | – | – |

**ШӘЙХ ЗӘЙНУЛЛА (Мәфтуха)**

Сәлихә (ҡыҙы)

Сәкинә (ейәнсәре) (Фәсхетдин)

Бүлә-бүләсәрҙәре:

Рауза – Әсхәт – Мәрйәм – Рәзиә – Нәжиә – Әнүәр – Фәрзәнә –Камил – Булат.

Сәлихә ҡәртнәйҙең беренсе ире «Рәсүлиә» мәҙрәсәһендә мулла, имам булған. Атаһыҙ ҡалған Сәкинә (беҙҙең әсәй) ишан-хәҙрәт

йортонда 8 йәшкә тиклем (1896 й.) тәрбиәләнгән. Һуңынан әсәһе менән Башҡортостанға киткән. 1909 йылда Сәкинә менән Фәсхетдин (атай менән әсәй) өйләнешкән. 1917 йылда улар Башҡортостандың Әбйәлил районы Асҡар ауылына күсеп киткәндәр.

## ҒАИЛӘМ ТАРИХЫ

Был мәҡәләлә мин уның тоҡомонан күргәндәремде, улар менән таныш булғандарым тураһында яҙам. Һүҙемде атайым Фәсхитдин бин Исмәғилдән башлайым. Ул Башҡортостандың хәҙерге Әбйәлил районы Ҡужан ауылында иң фәҡир ғаиләлә тыуып, дүрт йәшендә үкһеҙ йәтим хәлендә ҡала. Гәүһәр апайы унан 4 йәшкә оло була. Уны 11 йәше тулғас, Ҡырҡты аръяғындағы Буранғол ауылы егетенә кейәүгә биреп ебәрәләр туғандары, атайымды уға ҡушып бирәләр. Еҙнә кеше – еҙнә инде – ул бик ҡаты ҡуллы егет булып

сыға. Атай бахыр – бала кеше бер үҙе урмандан утын ташырға мәжбүр була. Уға еҙнәһенең туҡмағы йыш ҡына эләгеп тора. Сабырлығы бөткәс, атайым ҡаса. Ул Асҡарға барырға була, сөнки унда бер оло туғаны ниндәйҙер конторҙа эшләй. Әммә уны һыбайлы еҙнәһе һәм уның дуҫтары ҡыуып етәләр ҙә дилбегә менән бәйләп, үҙҙәренең алдынан кире Буранғолға алып баралар. Ваҡыт-ваҡыт сыбыртҡы менән эләктереп алалар. Бынан һуң еҙнә кеше тағы ҡатыраҡ булып китә. Атайым тағы ла ҡаса, әммә был юлы оло юл менән түгел, ә ситкә кейектәр юлы менән китә. Был хәлдәр уның 7–8 йәшенә тура килә.

...Нисек булһа ла атайым Асҡарға барып етә һәм туғанын табып ала. Оло кеше атайымды яңы ғына Асҡарҙа асылған мәктәпкә йүнләй торғас урынлаштыра. Ул мәктәптә уҡытыу урыҫ телендә бара. Халыҡ мәктәпте нишләптер «министерский» тип йөрөткән була.

Атайымдың урыҫ телен белеүе менән урыҫтарға ер һатыусы башҡорттар файҙаланалар. Әбйәлил районындағы өс урыҫ ауылдарының ерен Михайловка, Селивановка, Гусевканы атайым «һатҡан». Һәр дисятина ерҙе нимәгә алмаштырып һатҡандарын (үҙенсә «бартер»ҙы) ул иҫендә тота ине: шунса-шунса әсмүхә сәйгә, ҡаҙаҡ шәкәргә, тауарға, сөйгә һәм табаҡ тимергә.

... Ошо ауылдарҙың береһе – Селевановкаға атайым менән ҡул арбаһына ҡомалаҡ тейәп барҙыҡ (Асҡарҙан 16 саҡрым). Урамда осраған һәр ауыл кешеһенә атайым ҡомалаҡты бәрәңге йәки онға алмаштырырға тәҡдим итә ине. Әммә берәү ҙә риза булманы. Был һуғыш йылдарында (1942 йылда) булған хәл...

Ә шулай ҙа бер мәрхәмәтле мәрйә табылды. Ул беҙҙең күңелһеҙ генә ҡайтып китеүебеҙҙе күреп, хәлебеҙҙе атайымдан һораша башланы.

Атайым был ҡатынға үҙенең бала сағында ер һатҡанда тәржемәсе булыуын һөйләне. Был апай бик ҡыҙыҡһынды. Мине бик йәлләне, шикелле. 1942 йылда мин 14 йәштә инем. Ул беҙҙе ихатаһына индереп, 2-3 биҙрә бәрәңге бирҙе. Мин ер йөҙөндә «яҡшы кешеләр ҙә барлығын» шул ваҡытта аңланым.

«Министерский» мәктәптә атайым дүрт йыл уҡый. «Ашау, кейем байҙан» тигәндәй, был мәктәпкә тик йәтим балаларҙы ғына алғандар. Уны тамамлағас, 4-5 йыл батрак булып йөрөй. Әрмегә уны бер йыл алдан алалар. Хәҙерге Биссарабияла урынлашҡан кавалерияға эләгә. Был часть «Его величество великий князь Константинға ҡараған». Атайыма өйрәтергә тип монгол атын беркетәләр – бик уҫал, ярһыу ат булып сыға. Великий князь йыл һайын парад ҡабул итергә килә. Ул көндәре беҙҙе, һалдаттарҙы, артығы менән һыйлай торғайнылар,

тип хәтерләй ул. Әммә парад ҡына түгел, хәрби учениелар ҙа булған. Мәҫәлән, холостой атып торған пушкалар алдынан атың менән елдереп сабаһың. Шундай бер манёврҙарҙа «монгол» атайымды ергә бәрә. Уның янбашы һынып госпиталға эләккәс, хәрби хеҙмәт шуның менән тамамлана.

...Күпме ваҡыт үткәндер, атайым, тәүәккәлләп, Асҡарҙан Троицкийға Рәсүлиә мәҙрәсәһенә уҡырға тип бара. Уны мәҙрәсәгә алалар, бушлай уҡытырға, ашатырға һәм кейендерергә – был йәтимдәргә тигән льготаны ишан-хәҙрәт (ул мәҙрәсә хужаһы) тәғәйенләгән.

Шулай итеп, ул «Рәсүлиә» мәҙрәсәһенең шәкерте булып китә. Ул, әлбиттә, киләсәк тормошо нисек үҙгәрәсәген, нимәләр уны көтәсәген белмәй әле. Ә әлегә ул бушлай уҡый, бик тырыша, уҡырға йәбешеп ала. Уның уҡыуға

ошолай ихлас булыуы миңә лә күскәндер, күрәһең.

Атайым үҙенең мәҙрәсәлә уҡыуы тураһында бик һирәк һөйләне. «Бай шәкерттәр булды, фәҡир шәкерттәр күберәк ине», – тип әйтә торғайны ул. Шуларҙың береһе Мәжит Ғафури булған. Ул бай шәкерттәргә самауыр ҡуйып йөрөүен яҡшы иҫләй атайым. «Мин аҡсаны икенсе юл менән таптым – китап төпләү кәсебенә өйрәнеп алғайным. Китапҡа заказ биргән кеше, уларҙы бик тикшереп, һынап ала торғайны. Тышҡы ҡатырғаларынан тотоп, бар көсөн менән китапты һелкетә ине. Мин төпләгән китаптар бер ҙә өҙөлмәне», – тип хәтерләй шәкерт йылдары тураһында. Ул тағы итексе һөнәрен дә үҙләштергән булған.

... Ә йәйгеһен ул, башҡа шәкерттәр һымаҡ, ҡаҙаҡ далаларына кәсеп итергә сығып китер булған. Унда ҡаҙаҡ балаларын Ҡөрьән уҡырға

өйрәткән һәм Троицк аптектәренән алған дарыуҙар менән ҡаҙаҡтарға ярҙам иткән. Ә бынығы инде үҙе халыҡтар араһындағы бер оло тормош һабағы булған.

Ана шул йылдарҙың береһендә атайым бик уңған. Ул яңы мәсет һалынған ауылға барып сыға. Мәсетте һалдыртҡан бай «Кем мәсетте Ҡөрьән уҡып» лайыҡлы асыр тип конкурс иғлан иткән була. Шунда ике ғәрәп үҙҙәрен белдергәндәр. Бай наҙандарҙан булмаған, икән. Теге ике ғәрәп менән уныы ла һынап ҡараған һәм… Ҡөрьән уҡырға атайыма рөхсәт иткән. Ҡөрьән уҡып, мәсет асҡан өсөн хужа атайыма күп аҡса биргән. Уның Троицкиға ҡайтып ҡупшы кейемдәр һатып алыуы тураһында һөйләгәне әле лә хәтерҙә.

Атайым уҡыған сағында ишан-хәҙрәт Зәйнулла Рәсүлев уны һынап йөрөгән, сөнки мәҙрәсәне тамамлағас, мөғәллим-хәлфә итеп

үҙендә эшкә ҡалдыра. Бер-ике йылдан үҙенең ейәнсәре Сәкинәне атайыма кейәүгә бирә. Минең ишан-хәҙрәт нәҫеленән булыуым шул ваҡыттан башлана: ишан-хәҙрәт – ҡыҙы Сәлиха – ейәнсәре Сәкинә – бүләһе Булат (йәғни, мин булам).

Шулай итеп, атайым менән әсәйем ғаилә ҡороп, Троицкиҙа йәшәй башлайҙар. «Әтей», «әней», тип әйтеүебеҙ ҙә шунан килә.

1917 йылға тиклем уларҙың Троицкиҙа дүрт балалары була. Барыһына ла ишан-хәҙрәт үҙе исем ҡушҡан: Рауза, Әсғәт, Мәрйәм, Рәзиә.

Октябрь боролошонан һуң Троицкиҙағы Рәсүлиә мәҙрәсәһен ябалар. Беҙҙең атай менән әсәй Асҡарға ҡайталар. Атайым бында бик яҡшы 4–5 бүлмәле йорт һала, уның тәҙрәләре лә ерҙән байтаҡ юғары, күркәм була. 1928 йылда шул йортта мин тыуғанмын. Әммә беҙҙән был йортто 1930–1931 йылдарҙа совет хөкүмәте тартып

алған. Ә бына алмашына хужаларға бер ҡағыҙ ҙа бирмәгән.

1919 йылда Асҡарҙа тағы бер ҡыҙ бала тыуған. Әммә 1930 йылға тиклем өс ҡыҙ: Мәрйәм, Рәзиә һәм Нәжиә һыуыҡ тейеп, ҡаты ауырғандан һуң, үлеп ҡалғандар.

Атайым Асҡар мәктәбендә башҡорт һәм урыҫ телен уҡыта башлаған. Күрәһең, Троицкиҙа алған белеме етмәгәндер, уны йыл һайын Өфөгә курсҡа ебәреп торҙолар. Өфөнән ул мотлаҡ берәй китап һатып алып ҡайтыр булған. Иҫемдә ул китаптар: 1) Сборник произведений русских писателей; 2) Книга основоположника (Гомиопатие) медицины доктора Ганемана; 3) История древнего Востока, древней Греции и Рима. Һәм башҡа бик күп файҙалы китаптар булыуын яҡшы иҫләйем. Китап уҡырға һәм уны яратырға мине мәктәпкә тиклем атайым өйрәтте.

Атайыма ишан-хәҙрәттең кейәүе булыуы бик ҡыйбатҡа төштө: уны 1936–1937 йылдарҙа гел НКВД – ГПУға саҡырып һорау алып торҙолар. «Һин Әхмәтзәки Вәлиди менән ҡайҙарҙа осраштың, унда ни тураһында килештегеҙ», – тип ялҡытҡандар. «Бер ҡасан да мин Әхмәтзәки Вәлиди менән осрашманым, ҡул бирешмәнем», – тип яуап ҡайтарған атайым.

Был һорауҙарҙы башҡа кешеләргә лә биргәндәр. Улар барыһы ла атайымдың яуабын раҫлағандар. Шулай булһа ла, атайымды Мәскәүгә «Милләтселәр өҫтөнән булған судҡа» саҡырып алдылар. Һәм, ниһәйәт, уны Мәскәүҙә тулыһынса ғәйепһеҙ, тип, аҡланылар. Был 1938 йылда булды, шикелле.

Атайым Мәскәүҙән бер биҙрә алма алып ҡайтты. Беҙ ғаиләбеҙ менән беренсе тапҡыр алманы шунда тәмләнек. 1938 йылда атайымды Ленин ордены менән бүләкләнеләр. Был орден

беҙҙең районда икенсе тапҡыр тапшырылған булған. Аҙаҡтан беренсе орденды «Красная Башкирия» совхозының тракторисына биргәндәрен белдем.

Атайым 1958 йылда етмеш ете йәшендә вафат булды. Ул ғүмерендә бер тамсы ла араҡы эсмәне. Ә тәмәке тартты: һуғыштың беренсе көнөндә башлап тартты, һуғыш бөткәс шунда уҡ ташланы.

## ТӘРЖЕМӘҮИ ХӘЛЕМ

Мин, Булат Фәсхетдин улы Батталов, 1928 йылдың 19 апрелендә хәҙерге Әбйәлил районының Асҡар ауылында тыуғанмын. Атай-әсәй тураһында алдараҡ һөйләгәйнем. Ә хәҙер үҙемдең тормош юлым менән таныштырып үтәйем.

Мин Асҡар урта мәктәбендә белем алдым. 6–ға тиклем башҡорт класында уҡыным. Шунан

һуң «наҙан булып ҡалмайым әле» тип урыҫ класына күстем. Бер ыңғай Әнүәр ағайға эйәреп, фамилияны ла Исмәғиловтан Батталовҡа алмаштырҙым. Ул ваҡытта илдә кино күрһәтеү башланған, Баталов атлы киноактер мәшһүр ине. Ул хәҙерге Алексей Баталовтың атаһы булһа кәрәк.

Уҡыным да, йыл һайын йәйге каникулдарҙа ла эшләнем. 1942 йылда беҙҙең яҡҡа Свердловскийҙан геологтар килде. Миңә 14 йәш ине ул саҡта, шунда геофизик партияһында геодезист ярҙамсыһы булып киттем. Маршрут билдәләр өсөн ҡулланылған рейкаларҙы ташыным. Партия марганец рудаһын эҙләй, ә быға тиклем эшләп килгән рудниктарға (Украинаға, Грузияға) юлды немец киҫкән ине. Ҡырҡты тауында марганец эҙләп табылды һәм улар госрезервҡа билдәләнде. Икенсе йылды Асҡарҙағы төрлө организацияларҙа эшләнем.

Беҙҙең мәктәптә Ленинград һәм Рига ҡалаларынан эвакуация менән килгән уҡытыусылар уҡытты. Риганан килгән физика уҡытыусыһы йәһүд тураһында айырым әйткем килә. Ул – Марк Соломонович Стул беҙгә Энштейн һәм уның «теория относительности» тураһында күп һөйләне. Был теорияны донъяла ни бары өс кеше аңлай тип ғәжәпкә ҡалдырғайны. Ул көҙгө уборка ваҡытында беҙҙең бригадир булып йөрөнө. Ленинградтан килгән Нина Яковлевна тарих һәм әҙәбиәтте уҡытты. Был уҡытыусылар икеһе лә университета уҡытҡандар. Мин улар менән дуҫ булдым.

1946 йылда Асҡарҙа урта мәктәбенең 9 класын бөтөр-бөтмәҫ Магнитогорскиҙағы Тау-металлургия институт студенты булып киттем. Шул ваҡытта беҙгә бушлай ятаҡ, степендия бирҙеләр, ә илдә аслыҡ ине. Шуғалыр ҙа 90-сы йылдар башында бер шиғырымда:

Һағындыра Совет иле,

Һағындыра бала саҡ.

Бала сағым ҡайтмаҫ инде

Совет иле ҡайтасаҡ, – тип яҙғайным.

Мин икенсе курстан алып тик бишкә уҡыным. Бишкә уҡыған студентҡа степендия 25 процентҡа өҫтәлә ине. Атайым ҡартайған, ә ағайҙар иһә фронтта. Бишкә уҡырға нужа мәжбүр итте.

Институтты тамамлағас, миңә Силәбене һайларға мөмкинселек бар ине. Әммә минең арттан килгән бер курсташым ҡолағыма: «Булат Силәбене ҡалдыр миңә, һиңә, буйҙаҡ кешегә, Силәбеме, Орскмы – барыбер түгелме? Ә Силәбегә минең ата-әсәй күсеп киләләр», – тип шыбырлағайны.

Уның һүҙенә төшөп, комиссия алдына ингәс, Түбәнге Тагилға тәғәйенләргә ризалығымды бирҙем. Әммә бының өсөн аҙаҡтан етәксе профессорҙан эләккәйне.

Ә шулай ҙа миңә барыбер Силәбе заводында эшләргә яҙған. 1957 йылда яҙғыһын беҙҙең заводтан Силәбегә ҙур делегация ебәрҙеләр. Уның төп маҡсаты – «Ике заводтың социалистик хеҙмәт ярышы шарттарын тикшереү». Шул комиссия составына мине лә индергәндәр.

Беҙ, комиссия ағзалары, Силәбелә «үҙебеҙҙең» цехтарға таралышып эшләнек. Шунда мин доменный цех начальниге, инженер-техниктар менән осрашыуҙа ҡатнаштым һәм унда үҙемдең тәнҡитле иҫкәртмәләр менән сығыш яһаным. Цех начальниге миңә Силәбегә, ошо заводҡа, эшкә күсергә тәҡдим яһаны, фатир буласағын һәм башҡа шарттар вәғәҙә итте. Вәғәҙәләр үтәлде. Ошо металлургтар заводында эшләп хаҡлы ялға сыҡтым. Мәҙәниәт һарайында үҙешмәкәр коллективта ҡатнаштым, шиғырҙар уҡыным, мандолинала уйнаным.

…Әммә тормош 80-се йылдарҙа бик үҙгәрҙе. Магазин кәштәләре бушай, эскеселеккә ҡаршы көрәш иғлан ителде. Әммә икенсе яҡтан динде, мәсеттәрҙе тергеҙеү хәрәкәте башланды. Силәбе янындағы Мейәс биҫтәһенең (хутор) мәсетендә мәҙрәсә асылғас, мин шунда уҡыным. 1994 йылда Өфөгә барып имтихан тапшырып, «Имам-хатиб» дәрәжәһен алып ҡайттым (ДУМЕС-тың мөфтиәтендә булды имтихан). Шунан һуң Силәбе ҡалаһының Металургтар районында мәҙрәсәлә биш йыл мөғәллим булып торҙом.

Әлеге ваҡытта мин һауһаҡ түгелмен, аяҡтан ҡалдым. Мәғәфүрә Муллағәли ҡыҙы – хәләл ефетем, ул минең янымдағы фәрештәләй тоғро терәгем. Мин унһыҙ бер көндә лә күҙ алдыма килтерә алмайым.

Һикһәненсесе йылдарҙа Силәбелә подполковник ире менән Сафуат апай – мөфтий Ғәбдрәхман Рәсүлевтең кесе ҡыҙы йәшәне. Ул

ишан-хәҙрәттең шәжәрәһен ятҡа белә ине. Бында яҙылғандарҙың күп өлөшөн миңә Сафуат апай һөйләп ҡалдырҙы.

Сафуат апай 2007 йылдың 14-се майында 84 йәшендә вафат булды. Уның ире, Әнүәр еҙнә, хәҙер отставкалағы полковник, иҫән-һау, 87 йәштә.

Сафуат апай иҫән сағында «Муфтий Габдрахман Расулев старший сын ишан-хазрата Расулева» (Челябинск, 2000, 142 с.) тигән китап яҙҙы. Был китап ишан-хәҙрәттең йәш сағына бағышлана, уның тыуған ауылы Шәрип, Троицк ҡалаһы тураһында бик ҡыҙыҡ мәғлүмәттәр бар. Никольск, Кострома ҡалаларында һөргөндә булған йылдары тураһында һөйләй.

Был китап Силәбе дәүләт педагогия университетының типографияһында ни бары 50 дана донъя күрҙе. Уны апай туғандарға, таныштарға һәм зыялыларға бушлай таратты.

Миндә әлеге ваҡытта ошо китаптың ике данаһы һаҡлана.

*Ҡамса Мортазин*

## ПӘЙҒӘМБӘРҘӘР ТОҠОМОНАН

Дин – ул кешелектең рухи таянысы, өгөт-нәсихәттәре менән йәнде имләүсе тәрбиә сығанағы һәм хикмәтле тормош асылдарын аңлатыусы оло тәғлимәт. Тик ғилем эйәләре генә уның асылына төшөнә, изге Ҡөръән серҙәрен үҙләштерә һәм дәрәжәләргә эйә була. Халҡыбыҙ тарихында лайыҡлы урын алған ошондай абруйлы дин әһелдәренең береһе – Ғәбдрәхман Зәйнулла улы Рәсүлев.

Ғәбдрәхман Рәсүлев – Зәйнулла ишан-хәҙрәттең оло улы, уның изге эштәрен артабан дауам итеүсе арҙаҡлы башҡорт. 1881 йылдың 10 ноябрендә Өфө губернияһы Златоуст өйәҙенең Аҡкужа ауылында (хәҙер Башҡор-

тостандың Учалы районы) тыуа. Уның бала-сағы, йәшлек йылдары Троицк ҡалаһында уҙа.

Биш йәшкә еткәс, атаһы улын Троицкиҙағы заманы өсөн бик белемле Ғәбдуллажан хәлфә Кинжингә уҡырға бирә. Хәлфә уға белем серҙәрен аса, әҙәп ҡағиҙәләрен һәм дин ҡанундарын төшөндөрә, ҡурайҙа һәм ҡумыҙҙа уйнарға өйрәтә. 1899 йылда «Рәсүлиә» мәҙрәсәһен тамлмлап, имам дәрәжәһенә эйә була. Атаһының фатихаһы менән суфыйсылыҡты ҡабул итә, Мәккә һәм Мәҙинә ҡалаларына хаж ҡыла. 1902 йылда Ҡаһирәләге (Каир) әл-Азхар Ислам университетын тамамлай. Троицкиға әйләнеп ҡайтҡас, «Рәсүлиә» мәҙрәсәһендә ғәрәп телен һәм Ислам тарихын уҡыта.

1905 йылда «Рәсүлиә» мәҙрәсәһенең яңы бинаһы төҙәлгәс, Зәйнулла ишан директор вазифаһын 24 йәшлек улына тапшыра. Ғәбдрәхман хәҙрәт атаһы Зәйнулла ишан

башлаған йәзитселекте дауам итеп мәзрәсәлә байтаҡ яңылыҡтар индереүгә өлгәшә: белем базаһын киңәйтеүгә ҡоролған яңы предметтар индерелә; шәкерттәрзе төрлө һөнәрзәргә өйрәткән оҫтаханалар асыла; синыфтарза (бүлмәләрзә) уҡыу һәм языу уңайлы булһын өсөн парталар ҡуйыла.

1913 йылда мәзрәсәлә 13 мөғәллим эшләй, 240 шәкерт уҡый. 11 йыллыҡ программалы ярым донъяүи уҡыу йорто төплө белем бирә, алдынғы ҡарашлы йәштәрзе тәрбиәләй. «Рәсүлиә» мәзрәсәһе яңы методикалы уҡыу йорто булараҡ мосолмандар араһында киң танылa. Мәзрәсәнең үз типографияһы була. Унда дини китаптар, әзәби әҫәрзәр, уҡыу ҡулланмалары һәм календарзар баҫыла. «Айҡап» исемле ҡазаҡ телендә гәзит нәшир ителә.

1919 йылда яңы власть шарттарында «Рәсүлиә» мәзрәсәһе ябыла. 1923 йылда

Ғәбдрәхман хәҙрәт Урал өлкәһе буйынса имам итеп тәғәйенләнә. 1936-1950 йылдарҙа Бөтә Союз Диниә назаратында мөфтөй-рәйес булып тора.

Ғәбдрәхман хәҙрәт Рәсүлев ғаилә тарихы тураһында китап яҙырға хыялланған. Әммә уның был яҡты хыялы бик һуңлап булһа ла тормошҡа ашты. Уның ҡыҙы Сафуат апай Рәхмәнколова, хәҙер инде мәрхүмә, «Муфтий Габдрахман Расулев – старший сын ишан-хазрата Расулева» (Челябинск, 2000.144 с.) тигән китап яҙҙы. Был китап – башҡорт халҡы тарихында айырым урын алып тороусы ишан Зәйнулла хәҙрәт Рәсүлев һәм уның эштәрен һыналышлы Совет дәүерендә дауам итеүсе улы Ғәбдрәхман хәҙрәт тураһында йәнле иҫтәлек, Башҡортостанда Ислам дине тарихы һәм дин әһелдәре тураһындағы әһәмиәтле сығанаҡ.

Сафуат апай китабында ата-баба хәтерен зиһене һәм йөрәге аша үткәреп, ғаилә тарихын теҙеп бәйән итә. Ул унда атаһының исеме тураһында: «Ишан-хәҙрәт улдарының исемдәре бер иш башлана: Ғәбдрәхман, Ғәбдулла, Ғәбделҡәдир, Ғәбделсабур. Атайымдың улы тыуғас, ул да улына Ғәбдрәуф тип исем биргән. Ғәбд – ғәрәп теленән «Аллаһ бәндәһе, ҡоло», – тип яҙа. Ғәбдрәхман Рәсүлевтең исем-шәрифе лә шулай Зәйнулла ишан күҙ аллағанса күктә эшкәртелеп, һығылмаҫ һынға әйләнгәндер, күрәһең.

Аллаһы Тәғәләнең рәсүлдәре (рәсүл – ғәрәп теленән илсе, пәйғәмбәр тигән мәғәнәне аңлата) – улар артынан халыҡты Хаҡ юлға эйәртеүселәр, сабырлыҡ һәм сыҙамлыҡ әһелдәре. «Ҡаҡшамаҫлыҡ эйәһе булған рәсүлдәр түҙгән шикелле һин дә түҙ», – тип бойора бит изге китап. Изге зат Зәйнулла ишан да ике быуат ҡауышҡанда дәүер

һынауҙары үткән, Ғәбдрәхман хәҙрәттең дә яҙмышында һыналыштар аҙ булмай. Быуат башындағы Империалистик һуғыш, Рәсәй тормошон үҙгәртеүсе Октябрь революцияһы һәм Совет дәүерендә дингә ҡарата ҡырҡа үҙгәрештәр, унан һуң Бөйөк Ватан һуғышы йылдары – былар барыһы ла ил өҫтөнә төшкән оло һынауҙар. 1916 йылда Империалистик һуғышта Ғәбдрәхман хәҙрәттең ҡустыһы Ғабдулла һәләк була. 1917 йылда 84 йәшендә атаһы ишан-хәҙрәт донъя ҡуйғас, мосолман донъяһы йәтимһерәп ҡалғандай була.

Зәйнулла ишан үҙенең яҙмышы тураһында: «Аллаһы Тәғәлә миңә һынауҙар ебәрҙе, һәм мин уларҙы сабыр ҡабул иттем. Аллаһы Тәғәлә үҙенең ышаныслы ҡолдарын һынар өсөн төрлө һынауҙар ебәрә», – тигән. Ғәбдрәхман хәҙрәт тә шул терәккә таянып, совет осоронда әҙәрлек-

ләүҙәр һәм ҡаршылыҡтар аша Аллаһы Тәғәлә ҡушҡан хәҡиҡәт юлын тайпылышһыҙ дауам итә.

Сафуат апай совет осороноң тәүге көндәрен шулай хәтерләй: «Граждандар һуғышы тамамланғандан һуң «Рәсүлиә» мәҙрәсәһендә татар мәктәбе эшләй башлай. Атайым совет власына ошо мәктәпкә эшкә алыуҙарын һорап мөрәжәғәт итә, ләкин уның үтенесенән баш тарталар. Бына шулай 36 йәшлек дәрт-дарманы ташып торған ир уҙаманы, кисәге мәҙрәсә директоры булған талантлы педагог, йәштәрҙең таянысы һәм мәғрифәтсе бер кемгә лә кәрәкмәй, эшһеҙ ҡала... Тирә-яҡтағы мәсеттәр ябылғанлыҡтан Троицкийға айырыуса халыҡ йома көндәрендә ныҡ ағыла...». «Күңелһеҙ һәм билдәһеҙ көндәр» – автор яҙмыштың яңы миҙгелен, яңы совет дәүерен китабында шулай атай.

Ғәбдрәхман Рәсүлев йәмғиәттән ситләтелгәс, Өфөләге Советтар Союзының Үҙәк Диниә

назараты мөфтөйө Ризаитдин Фәхретдинов 1923 йылда уны Урал регионы буйынса имам итеп тәғәйенләй. Улар бергә бер нисә тапҡыр Мәскәүҙә Ислам дин әһелдәре менән осрашыуҙа ҡатнашалар. Беренсе тапҡыр Афғанстан короле Аманулла Хан, икенсе тапҡыр Төркиә Президенты Мостафа Кемал Ататөрк менән осрашалар.

1936 йылда Советтар Союзы мосолмандарының терәге, ғалим, әҙип, мөфтөй-рәйес Ризаитдин Фәхретдинов вафат була. «Ризаитдин үлгәс, – тип һөйләй имам-хатиб Булат Батталов, – имамдар Өфөлә йыйылып: «Мөфтиәтте ҡалдырырғамы, әллә ябырғамы?», – тигән һорау алдында ҡалғандар. Был кәңәшмәлә Башҡортостандың ВЦИК рәйесе Афзал Таһиров ҡатнашҡан. Ул имамдарҙың күпселегенең «Мөфтиәтте ябырға» тигән фекерен тыңлап бөткәс, һүҙһеҙ ултырған Ғәбдрәхман хәҙрәткә:

– Ә һеҙҙең фекерегеҙ нисек? Һеҙ кем? – тигән һорауҙар биргән.

– Мин Мөфтиәтте ябыуға ҡәтғи ҡаршы. Уны батша әбейебеҙ (әбей батша) ойошторған. Беҙ уны яба алмайбыҙ, – тигән Ғәбдрәхман хәҙрәт. Ул шунан үҙенең кем булыуын әйткән. – Хәҙер ябырбыҙ, ә аҙаҡ ул кәрәк булыр, – тип өҫтәгән.

– Бына Һеҙ мөфтөй булырһығыҙ, – тип Афзал Таһиров кәңәшмәне ябып, сығып киткән. Икенсе көндө дәүләт вәкилдәре килеп, мөфтиәттең нимәгә мохтаж булыуын тикшергәндәр. Өтәй мөфтөй булғас, тормошобоҙ яҡшырҙы, сөнки уға совет хөкүмәте эш хаҡы түләй башланы", – тип, һөйләгән уға Сафуат апай. Заманында Диниә назаратының яҙмышы ҡыл өҫтөндә саҡта Ғәбдрәхман Рәсүлевтең һүҙе уны шулай хәл иткән.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдары – оло һыналыш осоро. Бөтә Союз Диниә назаратының

һәм уның мөфтөйө Ғәбрәхман хәҙрәт Рәсүлев эшмәкәрлеге лә һынала. Мәçәлән, Рәүеф Насыров «Уҙамандарҙы эҙләйем» (Өфө, 1997) исемле очерктар китабында Ғәбдрәхман хәҙрәттең ҡыҙы яҙып ебәргән мәҡәләһенән ошондай легенда килтерә: «1942 йылда Сталин Ғәбдрәхман хәҙрәтте Мәскәүгә саҡыртып алған һәм һорау биргән: «Ни сәбәптән беҙ тик еңеләбеҙ?» Хәҙрәт уға: «Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылмайбыҙ һәм унан һорай алмайбыҙ», – тип яуап биргән. «Бына һин ғибәҙәт ҡыл», – тигән Сталин. «Юҡ, бөтә халыҡ ғибәҙәт ҡылырға тейеш. Ә һеҙ динде тыйҙығыҙ», – тип яуап биргән хәҙрәт. Сталин ошонан һуң динде рөхсәт иткән. Сталинградтағы еңеүебеҙ ошоноң менән аңлатыла, йәнәһе».

1942 йылда Диниә назаратында сираттан тыш кәңәшмә уҙа һәм унда «Советтар Союзы мосолмандарына мөрәжәғәт» ҡабул ителә. Был

мөрәжәғәттә Совет хөкүмәтенең мосолмандарҙы ҡыҫырыҡлау сәйәсәтенән баш тартыуы, мәсеттәр төҙөүе һәм ирекле рәүештә дини йолаларҙы уҙғарыуы тураһында әйтелә. Мөрәжәғәт башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, үзбәк телдәрендә баҫтырылып, мосолмандар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә таратыла. Мәсеттәрҙә, заводтарҙа һәм фабрикаларҙа уны халыҡҡа уҡып ишеттерәләр.

1942 йылдың майында мөфтөй-хәҙрәт Ғәбдрәхман Рәсүлев әҙерләгән мөрәжәғәт «Труд» газетаһында баҫыла:

«**Уважаемые братья-мусульмане**!

Вышеизложенные изречения великого Аллаһа и его пророка Великого Мухаммада призывают вас, мусульмане, не жалея сил, сражаться на полях брани за освобождение великой Родины, всего человечества и мусульманского мира от ига фашистских злодеев. Оставшиеся в тылу мужчины и женщины, не

поддавайтесь малодушию и панике, приложите все усилия для изготовления всех необходимых предметов для успешного ведения Отечественной войны и обеспечения жизни населения.

В этой святой Отечественной войне против фашистской Германии и ее приспешников, доказав свою правоту, покажите перед всем миром верность своей Родине, молитесь в мечетях и молитвенных домах о победе Красной Армии.

Мы ученые Ислама и духовные деятели, живущие в Советском Союзе, призываем всех мусульман к единодушной защите любимой Родины и мусульманского мира от германских фашистов и их приспешников. Молитесь великому и милостивому Богу о скорейшем избавлении всего человечества и мусульманского мира от тирании человеконенавистников – фашистов.

Нет ни одного правоверного, чей сын, брат или отец не дрались бы сегодня с немцами, отстаивая с оружием в руках нашу общую Родину. Так же, как и нет, наверное, ни одного, кто бы в тылу не помогал делу победы своим трудом на фабриках и заводах. Ибо мы, мусульмане, хорошо помним слова Пророка Мухаммада (мир ему): «Любовь к Родине – это часть твоей веры.»

1943 йылдың 3 мартында «Известия» газетаһында Ғәбдрәхман хәҙрәт Рәсүлевтың Советтар Союзы мосолмандары исеменән И.В. Сталинға яҙған телеграммаһы баҫыла:

**Т е л е г р а м м а**

Москва , Кремль

Иосифу Виссарионовичу Сталину

С великим удовлетворением посылаю

Вам от имени мусульман СССР салям.

Воодушевленный успехами нашей славной
Красной Армии,
я лично вношу 50 тысяч рублей на
строительство танковой
колонны и особым посланием приглашаю
верующих мусульман
жертвовать на постройку колонны танков.
Молясь Аллаху,
искренне желаю Вам здоровья и скорейшего
поражения врага.

*Муфтий Центрального*
*Духовного управления мусульман*
*Абдурахман Расулев*

«Тик боҙоҡ халыҡтар ғына һәләк ителә», – тип әйтелә изге Көрьән Кәримдә. Һуғыш йылдарында мәсеттәрҙә Ватанды яҡлау буйынса саҡырыуҙар яңғырай, аҙыҡ-түлек һәм кейем йыйып фронтҡа оҙатыу ойошторола. Бөйөк Еңеүҙе яулауҙа мосолмандарҙың да өлөшө ифрат ҙур була.

Ғәбрәхман хәҙрәт Рәсүлев мәғрифәт өлкәһендә байтаҡ эштәр башҡара. Дини календарҙар, уҡыу әсбаптары баҫтырып сығара. 1945 йылда Мәскәүҙә «Ислам дине» тигән китабы ғәрәп шрифттары менән донъя күрә. 1945–1946 йылдарҙа ул Өфөләге мәсеттә имам-хатибтар әҙерләү өсөн курстар асыуға ынтылыш яһай, ләкин Совет дәүләтенең дингә ҡарата ҡаты сәйәсәте арҡаһында ниәте тормошҡа ашмай. 1948 йылдың октябрендә Өфөлә мосолман руханиҙарының IV мәжлесе уҙа, унда яңы мөфтиәт ағзалары һәм уның рәйесе итеп йәнә Ғабдрахман Рәсүлев һайлана.

Ғәбдрәхман Рәсүлев Диниә назаратын хәтәр заманда һаҡлай, байтаҡ дин әһелдәрен репрессия касафатынан яҡлап алып ҡала. Әммә ул үҙе яҙған башҡорт һәм ҡаҙаҡ халҡының тарыхын һаҡлай алмай. «1905 йылдан алып барылған атайымдың көндәлектәре – ул беҙҙең

ғаиләбеҙ тарихы, Троицк ҡалаһының тарихы, – тип яҙа Сафуат Рәхмәнғолова хәтирәләрендә. – Мин бала саҡтан атайымдың башҡорт һәм ҡаҙаҡ халҡының тарихын яҙыуын белә инем, әммә уны беҙгә бер ҡасан да уҡыманы. Атайымдың быға ни өсөн ҙур әһәмиәт биреүен мин үҫкәс кенә белдем. Ул унда башҡорт ырыуҙары, халыҡтың көнкүреше һәм йолалары тураһында яҙғайны. Башҡорттарҙың һәм ҡаҙаҡтарҙың урыҫ батшаһы тарафынан ҡыҫырыҡланыуы, уларҙың тетрәнеүҙәре уның яҙмаларында сағылғайны. Башҡорт һәм ҡаҙаҡ халҡының батшаға ҡаршы ихтилалдары, уларҙың етәкселәре, совет осоро ҡорбандары, язаланғандар һәм кәмһетелеүҙәр – бына шулар тураһында һөйләй ине атайымдың ҡулъяҙмаһы. Зәйнулла ишандың тормошо, «Рәсүлиә» мәҙрәсәһенең тарихы, беҙҙең шәжәрәбеҙ ҙә бар ине унда. Ана шуларҙы һаҡлау өсөн Евпаторияла йәшәүсе Ғәбдрәүеф ағайыма

тапшырғайны атайым. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, һуғыш ваҡытында немец бомбаһы ағайым йәшәгән йортҡа төшөп, ҡулъяҙмалар янған».

Ғәбдрәхман Зәйнулла улы Рәсүлев 1950 йылдың 6 авгусында вафат була. Ул Өфө ҡалаһының мосолман зыяратында ерләнгән.

*Рафаэль Мөхәмәтйәнов*

## АРҒАЯШ ЯҒЫНДА 1919 ЙЫЛҒА ТИКЛЕМ ДИН ТОРОШО

Ислам диненең Арғаяш яғында ҡасан, нисегерәк тарала башлауына әлегә аныҡ ҡына дәлилдәр табылмаған. 1811–1850 йылдарҙағы Рәсәйҙә халыҡтың иҫәбен алыу материалдарында беҙҙең яҡтағы дин торошо тураһында мәғлүмәттәр бар. Мәҫәлән, 1850 йылғы халыҡ иҫәбен алыу материалдарында Байғаҙы ауылында 64 йәшлек мулла Әбдүлғәзин Арыҡбай

йәшәүе теркәлгән. Шул уҡ материалдарҙа һәр ауылда аҙансы, мулла тигән һүҙҙәрҙе осратабыҙ.

Башҡорттарҙың билдәле тарихи шәхесе, кантон начальнигы, 1812 йылғы Ватан һуғышы полковнигы Мөхәмәтҡолой Көсөков Сәғит ауылынан Мөхәмәтҡолойға күсеп килеү менән иң тәүҙә мәсет һалдыра, уның янында мәҙрәсә булдыра, муллалар саҡыртып балаларҙы уҡыта башлай. Ә үҙенең улы Ғәбдулланы Башҡортостандағы Таҙлар мәҙрәсәһенә уҡырға ебәрә. Һуңынан Ғәбдулла Ҡазан ҡалаһында гимназия тамамлай. Мөхәмәтҡолой Көсөков үҙенең кантонында бер нисә ауылда мәсет төҙөтә. Мәҫәлән, 1837 йылда Иҫәнгилде (Сәғит), Байрамғол ауылдарында, ә бына Ялтыр ауылында 1825 йылда уҡ мәсет асыла.

2006 йылда Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә сыҡҡан «Список населенных мест, часть II, Оренбургская губерния» китабында хәҙерге

Арғаяш районына ҡараған 30-ҙан ашыу ауылда мәсеттәр булыуы теркәлгән. Хәҙер инде тарих биттәрендә генә ҡалған бәләкәй генә башҡорт ауылдарында ла мәсеттәр булыуы билдәле. Мәҫәлән, 23 йортло Мансур (Ахун), 22 йортло Мортаза, 17 йортло 109 кеше йәшәгән Күсембай ауылдарында ла мәсеттәр булған. Халыҡ күпләп йөрөгән мәсеттәр Иҫәнгилде (Сәғит), Ҡуйһары ауылдарында булғандыр, сөнки был ауылдарҙа 645, 755 кеше йәшәгән.

Ауылдарҙа мәсеттәр төҙөү XIX быуаттың икенсе яртыһында бик йылдам барған. 1863 йылда Ишәлелә (Үләнде), 1862 йылда Бәжекәйҙә (Ҡыуандыҡ), 1868 йылда Дәрүиш ауылдарында барлыҡҡа килгән.

XX быуат башында Арғаяш ерҙәрендә 25 мәсет булып, 17513 кеше ғибәҙәт ҡылырға йөрөгән. 1917 йылға тиклем Силәбе өлкәһендә 229 мәсет булып, унда 165720 кеше ғибәҙәт

ҡылырға йөрөгән, уларҙы 8 ахун, 105 хатип, 174 имам, 168 мәзин хеҙмәтләндергән.

1917 йылға тиклем Башҡортостандың бер нисә төбәгендә дини үҙәк булған, шуларҙың береһе хәҙерге Арғаяш районының Миҙейәк ауылында урынлашҡан. 1860 йылда Миҙейәктә Ҡорманғәлиевтар (Ҡорбанғәлиевтар) тарафынан мәсет, мәҙрәсә һалынған. Ә уларҙың атаһы Хәмит Бурһыҡаев XVIII быуатта Силәбе өйәҙенең Исмәғил ауылында указлы мулла булып торған.

XIX быуат башында Хәмит Бурһыҡаевтың ейәндәре Ғәбдүлхәким, Сөнәғәтулла, Ғәбдүлхәлим, Хөсәмитдин, Шәрәфитдин Миҙейәк күле тирәһенә төпләнәләр. Улар Айбат, Имәнғол, Уҫман, Мөхәмәтҡолой, Миҙейәк ауылдарында мулла булғандар. Шулар араһынан **Әбдүлхәким улы Ғәбиҙулла Ҡорманғәлиев** Силәбе өйәҙендә билдәле ишан булып танылa.

1883 йылда Ырымбур губерния идараһы Миҙейәк ауылы башҡорто Ғәбиҙулла Ҡорманғәлиевты имам-хатиб һәм мөдәрис дәрәжәһендә раҫлай. Ул Троицкийҙа «Рәсүлиә» мәҙрәсәһендә белем ала. 1885 йылда ауылдаштары уны мәсеттең һәм мәҙрәсәнең етәксеһе итеп һайлайҙар. Мәсет һәм мәҙрәсә Ҡорманғәлиевтар иҫәбенә тотола. Батша указы менән Ғәбиҙулла Ҡорманғәлиев ахун дәрәжәһенә эйә була. Мәҙрәсә ҡәҙимгесә төплө белем бирә, әммә йәҙитсә уҡытыуҙы хупламай. 1912 йылда шул сәбәпле Ырымбур губерния идаралығы Ғәбиҙулла ишанды вазифаһынан бушата. Ауылдаштары бының менән килешмәй, улар уның урынына 22 йәшлек улы Ғәбдулхәйҙе һайлайҙар. Был ваҡытта мәҙрәсәлә 320 шәкерт уҡыған була.

Миҙейәк ауыл халҡы Ғәбиҙулла ишанды вазифаһына кире ҡайтарыуҙы һорап Ырымбур

губерния идараһына ике тапҡыр мөрәжәғәт итә. Ләкин был үтенес үтәлмәй ҡала, сөнки ишан эшмәкәрлеге батша хөкүмәтен ҡәнәғәтләндермәй. Ырымбур губерния идараһы Ғәбиҙулла Ҡорманғәлиев эшендә шундай кәмселектәр таба: 1) йәшерен рәүештә урыҫ грамотаһын өйрәтмәй, сөнки ул башҡорттарҙың борондан килгән милли хәлен һаҡлап ҡалырға теләй, ә урыҫлашҡан башҡорттар эскеселеккә һәм ҡомарлы уйындарға биреләсәктәр; 2) ул башҡаларға көслө йоғонто яһай, сөнки күпселек ауылдарҙа унын кешеләре идара итәләр.

1919 йылда Силәбе, Троицк суд ҡарарҙары менән Ғәбиҙулла Ҡорманғәлиевтан бөтөн ғәйептәр алына, уға ахун, ишан дәрәжәләре кире ҡайтарыла. Миҙейәк ауылының 147-нән 117 кешеһе ишанға ышаныс белдерә.

Ҡорманғәлиевтар абруйлы дин әһелдәре, эшлекле эшҡыуарҙар һәм сауҙа итеүселәр булып

танылалар. Улар меңәр десятина ерҙәргә хужа, өйөр-өйөр мал-тыуар үрсетәләр, Мәскәү, Петербург, Ырымбур, Екатеринбург, Акмолинск, Омск, Троицк, Өфө, Стәрлетамаҡ ҡалаларында күп һанлы сауҙа һәм алыш-биреш үҙәктәре тоталар. Хәйриә эшмәкәрлеге менән дә шөғөлләнәләр. Батша хөкүмәте йәмғиәттәге бик файҙалы шөғөлдө юғары баһалай һәм махсус танытма менән «Көмөш төйрәмес» тамғаһын тапшыра.

1917 йылдан һуң Ҡорманғәлиевтар ғаиләһенең хәле ҡырҡа үҙгәрә. Билдәле булыуынса Әхмәтзәки Вәлиди башҡорттарға автономия яҡлай, ә Ҡорманғәлиевтар быға ҡаршы сыға. Ҡорманғәлиевтар башҡорттар рухи яҡтан ғына үҙаллы булырға тейеш тиҙәр һәм үҙ аллы рухи башҡорт автономияһын булдырыу яғында торалар.

Вәлиди етәкселегендә башҡорттар ҡыҙылдар яғына күскәс, Ҡорманғәлиевтар Колчак ғәскәрҙәре менән Себергә китә. Унда Ваҡытлы Себер хөкүмәте төҙөргә ынтылалар, аҙаҡ Манчжурияла имам булып торалар. Һуңынан улар Японияға килеп төпләнәләр. Бында улар үҙ аҡсаларына мәсет, мәҙрәсә һәм типография асалар. Ғәбдулхай Ҡорманғәлиев, Совет власы Японияны тар-мар иткәс, ҡулға алына. 1955 йылға тиклем ул Владимир төрмәһендә сәйәси тотҡон булып ултыра. Унан ҡотолғас, Силәбегә кире әйләнеп ҡайта. 1972 йылда, оҙаҡ йылдар мулла булып торғандан һуң, донъя ҡуя.

1919 йылда Ғәбиҙулла Ҡорманғәлиев кесе улы Ғәбдул-Әүәл (1896–1919) менән Стәрлетамаҡ төрмәһендә ҡыҙылдар тарафынан атыла. Японияла Ғәбдулхәйҙең ике улы тыуа. Әммә Совет органы уға балалары менән осрашыу рөхсәт итмәй. 1926 йылда Миҙейәк ауылында

уның кесе улы Закуан йәшәгән. Ҡыҙы Бәһнәнә оҙаҡ йылдар Сосновка районының Долгое ҡасабаһында йәшәне. Бәһнәнәнең улы Наил әле иҫән.

Арғаяштағы күренекле дин әһелдәре тоҡомон башлаусы Ғәбдул-Хәким ишан Ҡорманғәлиев (1809–1872) Айбат ауылы зыяратында ерләнгән. Ауыл халҡы һөйләүе буйынса, элегерәк Айбат ауылы зыратына Ғәбдул-Хәким Ҡорманғәлиевты ололап, дин әһелдәре уның ҡәберенә зыярат ҡылғандар.

*Алевтина Вәлиева*

## ИМАНЛЫ ЮЛДАН ЯҘМАҪ

Һәр заман һүҙ башланыр бисмилланан,
Һәр ваҡыт эш башланыр бисмилланан,
Яҡшылар бисмиллаһыҙ эш ҡылмаған,
Эш тамам бисмиллаһыҙ һис булмаған.

*Мифтәхетдин Аҡмулла*

Яҙ. Май айы. Сихри гүзәллек. Саф һауа. Урман-ҡырҙар, йылға-күлдәр, күкһел тауҙар. Мөғжизәле Учалы яҡтары. Башҡортостандың ожмах ояһы!

Ҡабатланмаҫ гүзәллеккә таң ҡалып, туҡтай-туҡтай «Әүлиә» шишмәһенә етеп киләбеҙ. Беҙ Силәбе өлкәһенең Мифтәхетдин Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмә ағзалары – яҙыусылар, уҡытыусылар, студенттар, уҡыу-сылар, йәмғиәт эшмәкәрҙәре. Силәбе, Магнитогорск ҡалаларынан, Арғаяш, Ҡоншаҡ, Сосновка райондарынан йыйылғанбыҙ. Был беҙҙең Изге Әүлиә шишмәһенә сәфәребеҙ.

Илсе Ғайса ҡәберенә зыярат ҡылабыҙ. Әүлиә шишмәһенән ризыҡланабыҙ. Әүеш тауҙың башында ерләнгән Рамазан әүлиә ҡәберенә килеп баш эйәбеҙ. Изге әүлиә ҡәберен ете тапҡыр әйләнеп сығып, уның рухына доға ҡылабыҙ. Тауҙың тирә-яғын ҡарап торғандан һуң

оҙатып йөрөүсе хөрмәтле хужалар быуындан-быуынға тапшырыла килгән легендаларға, риүәйәттәргә күсәләр.

Беҙҙе ҡаршы алыусылар араһында республикала танылған арҙаҡлы шәхестәр бар. Шуларҙың береһе – йырау, яҙыусы, йәмғиәт эшмәкәре Спартак Ильясов. «Барын-табын хәтере» тигән китап яҙып халыҡ хәтерен яңыртҡан аҡһаҡал, Силәбенән килгән һәр бер ҡунаҡҡа үҙенең китабын бүләк итте.

Абруйлы аҡһаҡал Спратак Мөжәүир улы йола һаҡлай. Ер хәтере менән йәш быуынды ата-бабалар рухында тәрбиәләүгә ҙур өлөш индерә ул. Беҙгә шундай легенда бәйән итте: «Әүеш тауы башында ислам динен үҙ дәүләтендә таратыусы Алтын Урҙа ханы Беркә хан һәм унан 100–200 йыл һуң шул уҡ башҡорттар араһында дингә өндәүсе шәйех Мөхәммәт Миһнән Алүсә күмелгән. Ә Беркә ханға тиклем үк Әүлиә

шишмәһенән алыҫ түгел тауҙың көнбайыш битендә Рамаҙан әүлиә ерләнгән. Рамаҙан әүлиә һәр намаҙ алдынан шул шишмәлә ғөсөлләнер булған. Халыҡҡа бик күп аң-белем, яҙма, ғөрөф-ғәҙәт өйрәткән, күрәҙәселек тә ҡылған, дауалаған. Шуға ла халыҡ уны әүлиә тигән, уға ышанған, ислам тәғлимәтен өйрәнгән, яңы фекергә күнеккән. Шишмә йылына бер тапҡыр бер айға ғына сыҡҡан, серле көскә эйә булған һәм Әүлиә шишмәһе исемен алған.»

Ер хәтере минең хистәремде бүлеп, бик алыҫтарҙа ҡалған бала сағыма алып ҡайтты. Әсәкәйем күҙ алдыма килеп баҫты. «Иманлы юлдан яҙмаҫ», – тип әйтер ине. Ул һөйкөмлө, асыҡ йөҙлө, йомшаҡ күңелле, уңған, ярҙамсыл, ҡул эштәренә оҫта абыстай ине. Ғәрәп, башҡорт, татар, урыҫ телдәрендә уҡый-яҙа белеп, матур әҙәби телдә һөйләшер ине. Әсәйем – Фәхитә Әхмәтсафа ҡыҙы Баһаутдинова-Зинурова. Ә

уның атаһы Әхмәтсафа ибн Баһаутдин (1861–1929) күренекле дин әһеле, ахун, Өфө губернияһы, Златоуст өйәҙендә мосолмандар башлығы, «Әхмәдиә» мәҙрәсәһендә имам, мөдәррис (Указ 27.12.1905). Әсәкәйем кистәрен ҡул эштәренә өйрәтер, яттан Мәжит Ғәфури, Ғабдулла Туҡай, Александр Пушкин шиғырҙарын йотлоғоп уҡыр ине. Шәйехзада Бабичтың «Ултырҙым да тауҙың күкрәгенә» тигән шиғырын көйләп, йырлай торғайны…

Изге Әүлиә шишмәһенә килеп доғалар ҡылдыҡ, Аллаһҡа рәхмәттәр уҡыныҡ. Тарихи хәтеребеҙҙе яңырттыҡ. Рухыбыҙ шат ҡалды, йәнебеҙ сафланды. Изге әүлиәләр ере күңелгә йәм өҫтәне. Изге Әүлиә тауында, Иман юлында осрашып сауаплы булдыҡ.

# ӘҘӘБИ ӘҪӘРҘӘР

*Булат Батталов*

## МӨНӘЖӘТ

Хоҙай биргән динебеҙ бар –
Беҙҙе һаҡлап килеүсе.
Ислам дине – Хаҡ Дин, – тигән
Беҙҙе ижад итеүсе.
Был донъяға беҙ киләбеҙ
Һынауҙар үтмәк өсөн.
Һынауҙарҙы үтә алһаҡ,
Йәннәткә кермәк өсөн.
Ә һынауҙар анһат түгел:
Ҡыйындан-ҡыйын һабаҡ.
Ә бәндә бит зәғиф мәхлүк,
Өлгөрмәй тыуған һымаҡ.
Шуға ла бит Хаҡ Тәғәлә
Өйрәткән зәғиф ҡолон.
Аҙашмаҫҡа, тайпылмаҫҡа –

Күрһәткән тура юлын.
Ҡөрьән биргән ҡолдарына,
Пәйғәмбәрен ебәргән:
Мөхәммәдәр-расүлуллаһ
Беҙгә уны еткергән.
Ҡөрьән, Сөннәт үә Шәриғәт –
Мосолмандың терәге.
Һынауҙарҙы үтер өсөн
Донъяла иң кәрәге.

*Урал Ҡолошов*

## РӘХМӘТ КӨСӨ

Рәхмәтең менән бергә йөрө –
Ғүмерең булыр моңло бер йыр.

*Әйтем*

Ер йөҙөндә Аҙашма исемле бер терпе йәшәгән, ти. Бер ваҡыт ул урман буйлап еләк-емеш эҙләп сығып киткән. Урман ситендә Аҙашма ҡып-ҡыҙыл булып бешкән алмаларға күмелеп

ултырған Алмағасты күреп ҡалған. Терпе үрелеп-үрелеп ҡараған, ләкин бер алманы ла өҙә алмаған.

Аҙашма бүтән йәнлектәр кеүек ағас буйлап үрмәләй белмәгән. Ул шулай, ауыҙ һыуҙарын ҡоротоп, Алмағас тирәләй йөрөгәндә, Минтимә исемле һайыҫҡан осоп килгән, ти. Шунан Аҙашма уға ярҙам һорап мөрәжәғәт иткән. Минтимә үҙенең оҫталығын күрһәтеүгә уңайлы мәл сығыуына ҡыуанып, терпегә иң ҙур, иң бешкән алманы өҙөп биргән. Ә терпе ҡыуанысынан рәхмәт әйтергә лә онотоп, ҡайтып киткән. Минтимә: «Был терпе тәрбиәһеҙ икән, миңә рәхмәт тә әйтмәй китте», – тип һөйләнеп ҡалған, ти.

Уның был һүҙҙәрен ишетеп ҡалған Алмағас, үпкәләп: «Минтимә, һин нимә үҙеңдең йылғыр-лығың менән маҡтанып ултыраһың? Мин булмаһам, терпегә ул алманы ҡайҙан алып бирер

инең?» – тигән. Шул ваҡыт уларҙы ишетеп торған Ер-Әсә телгә килгән: «Мин булмаһам, ай-һай, Алмағас, һинең алмаларың да, үҙең дә булыр ине микән?»

Быларҙың бәхәсен ишетеп Һауа, Ҡояш һәм Ғәлләм асыуланған. Бар тирә-яҡ ҡараңғыланып, көслө ел-дауыл сыҡҡан. Өйөнә ҡайтып барған терпе аҙашҡан. Ул шулай тағы ла Алмағас янына килеп сыҡҡан. Ҡараһа, бөтә алмалар ҙа ергә ҡойолған, ағас башында етемһерәп кенә һайыҫҡан Минтимә ултыра, ти. Терпе ҡыуанып:

– Эй, Минтимә, һин унда юғарынан күпте күрәһең, миңә юл күрһәт әле, – тигән.

Ә һайыҫҡан үпкәле тауыш менән:

– Бая алманы алғас рәхмәт тә әйтмәй киттең, шуға хәҙер аҙашып ҡаңғырып йөрөйһөң, – ти икән.

Аҙашма, ысынлап та, рәхмәт әйтмәгәнен иҫләп, һайыҫҡандан ғәфү итеүен һорап, рәхмәттәр яуҙыра башлай. Минтимә:

– Рәхмәтеңде Алмағасҡа әйт, алмалар уныҡы бит, – тигән.

Алмағас:

– Рәхмәтеңде Ергә әйт, мин унан йәшәү һуты алам, – тигән.

Ер:

– Рәхмәтеңде Ҡояшҡа әйт, беҙ унан йылы һәм яҡтылыҡ алабыҙ, – ти.

Аҙашма бөтә Ғәләмгә рәхмәтен белдерә. Әллә, ысынлап та, Ғәләм, Аллаһы Тәғәлә уның рәхмәтен ишетә, әллә былай ғына мөғжизә була, ни булһа ла ҡапыл ел тыма, Ҡояш балҡып китә. Аҙашма тағы ла алмалар йыйып алып, ҡыуана-ҡыуана өйөнә ҡайтып киткән, – ти.

Боронғолар юҡҡа ғына: «Бер рәхмәтең мең бәләнән ҡотҡара», – тип әйтмәгәндәр икән.

## БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫНАН ЛЕГЕНДАЛАР[3]

### Хәким ишан ҡәбере

Сарҙаҡты зыяратында Хәким ишан ерләнгән. Ул балаларына васыят итеп: «Балаҡайҙарым, үлһәм, мине был зыяратҡа ҡуймағыҙ! Уны ҡайсан да булһа һыу баҫыр, шуға ҡалҡыу ергә, тау башына ерләгеҙ!» – тигән.

Аталары вафат булғас, балалары уны тыңламай. Тау башында башҡа ҡәберҙәр булмағанлыҡтан, яңғыҙ ятмаһын тип, ишанды зыяратҡа алып барып ерләйҙәр. Аҙмы-күпме ваҡыт үткәс, улы төш күрә. Имеш, атаһын ҡуйылған ҡәберенән алып киткәндәр. Бер аҙ ваҡыт үткәс, тағы ла төшө ҡабатлана. Был ҡурҡа,

[3] Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы Иҫке Субыл ауылында йәшәүсе Көсөғолов Мөхөбулла Вәлиулла улынан (1923 йылғы, мулла) Фәнирә Гайсина яҙып алған.

уйлана. Өсөнсө тапҡыр төшө ҡабатланғас, ауылдаштарына һөйләргә мәжбүр була.

– Атайымды төшөмдә күрҙем. Ул ҡәберендә юҡ, уны фәрештәләр алып киткән. Зыяратҡа барҙым, ҡәбере буш. Ҡәбер өҫтө өңөлөп ҡалған.

Кешеләр быға ышанмай. Нисек инде мәйет юҡ булһын? Биш-алты кеше барып ҡарайҙар, ҡәберҙе ҡаҙырға ҡурҡалар. Ҡалай булһа ла, аҙаҡ ҡәберҙе ҡаҙыйлар, ысынлап та, ләхете асыҡ, мәйете юҡ. Аталары әйткән ҡалҡыу ергә барып ҡараһалар, яңы ғына күмелгән ҡәбер өйөмө ята, ти. Был фәрештәләр эше, тиҙәр.

### Зәйнулла ишан шишмәләре

Зәйнулла ишан хаж ҡылған. Бохаранан Мәккәгә йәйәү барған, өс ай барған, өс ай ҡайтҡан. Йәйәү барыуҙың сауабы ҙур. Ҡайтышлай ауылдан ауылға зыярат ҡылып, тәсбих тартып, намаҙ уҡып, ҙур ғилемлеккә

ирешеп, фатихалар алып йөрөй. Беҙҙең яҡта бер ҡатынға килеп керә.

– Балам, тамағым ҡатты, бер-ике уртлам һыу бирмәҫһеңме? – тип һорай.

– Эй, буай, һиңә түгел үҙебеҙгә юҡ әле.

Ауылда шишмәләр булмағанлыҡтан, халыҡ һыуһыҙ интеккән икән, һыуға бик йыраҡҡа йөрөгән була был ҡатын.

– Эй, балам, улайһа силәгеңде ал да минең арттан сыҡ.

Ҡатын силәген ала ла Зәйнулла ишан артынан китә.

– Ошонда һыу булһа, яраймы? Ошонда һыу булһын, – тип доғаһын уҡып, таяғы менән ергә төртә. Төртөүе була, ерҙән һыу урғып сыға. Бер аҙ бара ла тағы ергә таяғы менән төртә, тағы, тағы... Шулай биш урында һыу урғып сыға. Иҫке Субылға йәйәү килә. Араһы алты саҡрым. Бында ла өс ергә төртә. Шунан китә Һары ауылына,